# САЛАУАТ ЮЛАЕВ





# САЛАВАТ ЮЛАЕВ

*Стихотворения*
*Песни*
*Документы*

УФА
«КИТАП»
1994

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ

*Шиғырҙар*
*Йырҙар*
*Рәсми ҡағыҙҙар*

ӨФӨ
«КИТАП»
1994

Төҙөүсе, баш һүҙ һәм аңлатмалар авторы, тарихи яҙмаларҙы хәҙерге телгә әйләндереүсе — М. Х. Иҙелбаев

**Юлаев Салауат**

**Ю 37** Шиғырҙар, йырҙар, рәсми ҡағыҙҙар. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1994. — 152 бит.

ISBN 5-295-01437-1

Китапҡа милли герой, полководец һәм сәсән Салауат Юлаевтың шиғырҙары, йырҙары һәм 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ул ҡул ҡуйған рәсми ҡағыҙҙар тупланған.

**Ю $\frac{4702110200 - 57}{М\ 121(03) - 94}$ 83—94** **ББК 84 Баш**

**ISBN 5-295-01437-1**

© Юлаев Салауат, 1994

# Милли батыр, шағир, публицист

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының күренекле полководецы, сәсән-шағир Салауат Юлаев ижады XVIII быуат башҡорт әҙәбиәте, мәҙәниәте һәм ижтимағи аңы үҫешендә ғәйәт ҙур урын биләй.

Салауат Юлаев 1754 йылда Башҡортостандың Себер юлы Өфө провинцияһы Шайтан-Көҙөй волосы Тәкәй ауылында (хәҙер — Башҡортостандың Салауат районы)) тыуған.

XIX быуат яҙыусыһы Ф. Д. Нефедов, халыҡ риүәйәттәренә нигеҙләнеп: «Ғаилә, тәбиғәт һәм мәктәп уның тәрбиәселәре булған. Халыҡ яҙмышына төшкән бәхетһеҙлектәр хаҡында үҙҙәренең өйөндә әсәһенең моңло йырҙарын, атаһының һөйләгәндәрен тыңлаған. Салауат әсәһен бик яратҡан, атаһына айырылмаҫ булып эйәләшкән; ҡайҙа барһа — улы ла уның артынан ҡалмаған»,—

тип яҙа [1]. Салауаттың ҡайҙа ниндәй белем алыуы тураһында бөгөнгө көндәрҙә батырҙың тыуған яҡтарында таралған легендалар нигеҙендә генә фараз итә алабыҙ. Буласаҡ батырҙың тәү башлап уҡыу-яҙыуға әсәһенән өйрәнеүе, аҙаҡ Ҡазан яғынан килгән мулла (абыз) ҡулында уҡыуы һәм яҡынтирәләге ҙурыраҡ мәҙрәсәләрҙең береһендә белем алыуы хаҡында риүәйәттәр бар [2]. Салауаттың ҡулъяҙмаларына, яҙыу стиленә, имзаларына ҡарап та уның ҙур уҡымышлы кеше булғанлығын төҫмөрләйбеҙ.

«Тиҙ тәьҫирләнеүсән, дәртле һәм шиғри натуралы» [3] егет йәштән үк аҡыл зирәклеге һәм баһадирҙарса физик көсө менән айырыла, үҙендә ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек, хәл иткес мәлдәрҙә өҫтөнлөк алыу сифаттарын тәрбиәләй. «Салауат Юлаев» романының авторы С. Злобин бер документаль очеркында егеттең үҫмер сағын түбәндәгесә күҙ алдына баҫтыра: «Ун өс йәшендә ул матур кәүҙәле егет булып өлгөрә, сабып

---

[1] Башкирия в русской литературе, т. 2. Уфа, 1964. С. 127.

[2] Сидоров В. Шағир һәм яугир Салауат. Өфө, 1985, 11-се бит. Мәһәҙиев М. Салауаттың әсәһе кем булған? — Башҡортостан ҡыҙы. 1979. № 3. 21-се бит.

[3] Башкирия в русской литературе, т. 2. С. 127.

барышлай ат өҫтөндә аяҡ үрә баҫып, түбәтәйен һикертеп кире тотоп ала алған, уҡ кеүек осоп килешләй эйәрҙән ергә эйелеп, юл ситендәге сәскәне тамыры менән йолҡоп сығарған, аты менән төлкөнө ҡыуып етеп, ҡамсыһы менән үлтерә һуҡҡан»[1]. Фольклор материалдары һөйләүенсә, 16—17 йәштәрҙә Салауат алтмыш йәшәр «ил сәсәне — ҡарты» Байыҡ Айҙар менән осраша. Шул мәлдә уҡ әле атаҡлы сәсән йәш егеткә: «Салауат тигән исемең ишетеп беләм ҡолаҡтан», — тип, уның үҙенә генә төбәп ҡобайыр сығара, ил яҙмышына ҡағылышлы оло мәсьәләләр менән уртаҡлаша.

Шайтан-Көҙөй волосының старшинаһы Юлай Аҙналин, 1772 йылда Польша походына сығып китешләй, үҙенең урынына улы Салауатты ҡалдыра. Волость менән идара иткәндә Салауат Юлаев урындағы мәсьәләләрҙе хәл итеү менән генә сикләнмәй, юғары власть органдарына ла хәбәрҙәр ебәрә. Уның старшина вазифаһын башҡарған ваҡытта Өфө провинция канцелярияһына яҙған бер ҡулъяҙмаһы һаҡланған[2].

---

[1] Үҙәк дәүләт әҙәбиәт һәм сәнғәт архивы. ф. 2175, оп. 2, һаҡлау берәмеге III. 4-се бит.

[2] Документаль яҙмаларға һәм шиғри текстарға ҡағылышлы ентеклерәк мәғлүмәтте иҫкәрмәләрҙән ҡарағыҙ.

1773 йылдың көҙөндә Емельян Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы башланғас, Юлай Аҙналин, Екатерина Икенсенең манифесында ҡушылғанса, батша ғәскәрҙәренә ярҙамға һикһән һыбайлынан торған отряд әҙерләп, Салауатты уларға баш итеп, Стәрлетамаҡ пристанына ебәрә. Башҡортостандың бөтә яҡтарынан ошонда йыйылған 1200 самаһы кеше, артабан Ырымбурға барышлай, Бикҡол ауылы янында тулыһынса тиерлек баш күтәреүселәр яғына күсә. Салауат Ырымбур эргәһендәге Берда биҫтәһендә Е. И. Пугачев менән осраша, үҙ ҡарамағындағы отряды менән губерна үҙәген ҡамауҙа ҡатнаша. Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе этабында (1774 йылдың март аҙағына тиклем), восстаниеның төп көстәре Ырымбур менән Өфөнө ҡамап торған ваҡытта, Салауат Юлаев, Пугачев ҡушыуы буйынса үҙ аллы хәрәкәт итеп, Красноуфимск крепосын ике тапҡыр ала, Көнгөр ҡалаһын ҡамап тора. Крәҫтиәндәр һуғышының икенсе этабында, 1774 йылдың апрель—июнь айҙарында, ул Башҡортостандың тау-урманлы райондарында батша ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыша. Сим, Йүрүҙән заводтарын ала, подполковник И. И. Михельсон ғәскәрҙәре менән бер нисә ҡат

бәрелешә. 2 июндә Үргә Ҡыйғы ауылы янында Емельян Пугачев менән Салауат тағы бер тапҡыр осраша. Был юлы башҡорт батыры уға өс мең кешенән торған ғәскәр килтереп тапшыра. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙен оҫта хәрби ойоштороусы итеп күрһәткән Салауатҡа — баш күтәреүселәр армияһындағы иң йәш полковниктарҙың береһенә — бригадир дәрәжәһе бирелә. Крәҫтиәндәр һуғышының өсөнсө этабында Салауат Юлаев Башҡортостан территорияһында тулыһынса үҙ аллы хәрәкәт итә. Крәҫтиәндәр һуғышы ялҡыны Башҡортостандың Себер һәм Оса юлдарында ҡабат тоҡанып китә. Әммә был ваҡытта, бүтән урындарҙа восстание баҫтырылыу сәбәпле, батша ғәскәрҙәре төп иғтибарҙы Салауат Юлаев отрядын эҙәрләүгә йүнәлтә. 25 ноябрҙә Салауат, дүрт кенә иптәше менән ҡамалып, дошман ҡулына эләгә. Ләкин ул көрәшеүҙән туҡтамай. Үҙенең һәм яугир дуҫтарының «гәйебен» мөмкин тиклем йәшерергә, үлем язаһынан ҡотолоп ҡалырға тырыша. Суд тикшереүе бер йылға яҡын һуҙыла. Ахыр сиктә, 1775 йылдың июль—август айҙарында уны үҙе элек көрәшеп үткән урындарҙа (Сим заводында, Юлай, Лаҡлы ауылдарында, Красноуфимск, Көнгөр, Оса ҡала-

ларында, Нөркә ауылында) 175 тапҡыр ҡамсы менән һуҡтырып, танауын ҡырҡып, битенә эсе тимер баҫып, 2 октябрҙә Рогервик крепосына мәңгелек каторгаға ебәрәләр. Салауат Юлаев каторгала 1800 йылдың 26 сентябрендә үлә.

Шағирҙың ижади мираҫы шиғри әҫәрҙәрҙән һәм Крәҫтиәндәр һуғышы осорон сағылдырған документаль яҙмаларҙан тора.

Билдәле булыуынса, Салауат Юлаевтың шиғырҙары тәүге тапҡыр 1880 йылда «Русское богатство» журналының 10-сы һанында донъя күрә: Мәскәү яҙыусыһы Ф. Д. Нефедовтың «Пугачев яуы алдынан башҡорттар хәрәкәте; Салауат — башҡорт батыры» исемле мәҡәләһе эсендә уның биш шиғыры бирелә. 1893 йылда крайҙы өйрәнеүсе Р. Г. Игнатьев үҙенең «Башҡорт Салауат Юлаев — Пугачев бригадиры, йырсы һәм импровизатор» тигән әҫәре менән бергә шағирҙың ете шиғырын матбуғатҡа сығара. Әҙәбиәт һөйөүселәргә бик оҙаҡ дәүер Салауаттың ошо ете әҫәре генә билдәле булып килде, ә төрлө осорҙа матбуғатта баҫылған, архивтарҙа һаҡланған тағы бер нисә шиғырына, халыҡ телендә йөрөгән импровизацияларына ни бары 1970 йылдар тирәһендә генә иғтибар ителә башланы.

Салауат Юлаевҡа арналған фольклор әҫәрҙәрендә — йырҙарҙа, легенда-риүәйәттәрҙә — уның батырлығына, тапҡыр аҡыллылығына һәм башҡа сифаттарына ҡушып, сәсәнлек таланты тураһында ла әүәлдән үк иҫкә алына барған. Халыҡ Салауаттың шиғри әҫәрҙәре ике юл менән — импровизация аша һәм ҡәләм тотоп ижад ителеүен, йәғни уның бер юлы сәсән дә, шағир ҙа булыуын дөрөҫ шәйләгән.

Көнсығыш халыҡтары әҙәбиәтенең бер мөһим үҙенсәлеге бар. Боронғо дәүерҙә, урта быуаттарҙа, хатта XVIII—XIX быуаттар эсендә йәшәгән күп кенә шағирҙарҙың ижады беҙҙең заманға үҙҙәренең төп нөсхәһендә килеп етмәгән, байтаҡ әҫәрҙәре халыҡ хәтерендә һаҡланған. Был үҙенсәлек әҙәби мираҫты өйрәнгәндә мотлаҡ иҫәпкә алына. Мәҫәлән, төркмәндәрҙең атаҡлы Мәхтүмҡолой, Кәминә (XVIII быуат), ҡырғыҙҙарҙың Тоҡтағол, ҡаҙаҡтарҙың мәшһүр Абай Ҡонанбай (XIX быуат) ижады бөгөн нигеҙҙә ана шул халыҡ хәтере арҡаһында билдәле.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ Салауат Юлаев ижадын ошондай юл менән өйрәнеүгә байтаҡҡа һуңланыҡ. 1920 йылдарҙа аяҡҡа баҫып килгән әҙәбиәт белгестәребеҙ, баш-

ҡорт әҙәбиәтенең, сәнғәтенең, мәҙәниәтенең иң төп көстәре менән бергә, 1937—38 йылдарҙа шәхес культының ҡорбандары булды. 1950 йылдарҙа яңынан үҫеп сыҡҡан бик аҙ һандағы белгестәр бөтәһенә лә өлгөрә алманы. Ул арала инде Салауат хаҡында яҡшы белгән оло быуын кешеләре лә беҙҙең аранан берәм-берәм **китә барҙы.**

Салауат Юлаев ижадын өйрәнеүгә оҙаҡ ваҡыт тейешле иғтибар бирелмәне. Битарафлыҡ шундай дәрәжәлә ине: уның Р. Г. Игнатьев һәм Ф. Д. Нефедов мәҡәләләре эсендә XIX быуатта рус телендә баҫылған 9 шиғри текстың етәүһе генә билдәле булып йөрөнө, ә яугир-шағирҙың ижадын ниндәйҙер кимәлдә тулыландырырлыҡ бөтөн сығанаҡтар хаҡында уйлап та ҡаралманы. Был эште 1970 йылдар уртаһында профессор Ғ. Б. Хөсәйенов башлап ебәрҙе. Хәҙер Салауаттың поэтик мираҫы 500-ләп юлдан ашып китте.

Ниндәй текстар иҫәбенә тулыланды һуң Салауат шиғриәте?

Беренсенән, XIX быуатта яҙыусы Ф. Д. Нефедов, XX быуат башында тарихсы-этнограф С. И. Руденко, 1950 йылдарҙа музыка белгесе Л. Н. Лебединский милли батыр тураһындағы йырҙарҙың мөһим бер үҙенсәле-

генә иғтибар иттеләр: йөкмәткеһе буйынса ул йырҙар, баҡһаң, ике төркөмгә бүленә, береһе — халыҡтыҡы, икенсеһе — Салауаттың үҙенең йырҙары. «Салауат хөрмәтенә йырланған башҡорт йырҙарының ҡайһылаларын — халыҡ, ә башҡаларын Салауат үҙе сығарған», — ти, мәҫәлән, Ф. Д. Нефедов [1]. Ысынлап та, халыҡ йырҙары репертуарында батырҙың үҙенең исеменән әйтелгән бөтөн, үҙ аллы йөкмәткеле дүрт юллыҡтар күп кенә. Уларҙы үтә талапсанлыҡ менән һайлап алғанда ла, егермеләп дүрт юллыҡты ышаныслы рәүештә Салауаттың үҙ йырҙары иҫәбенә индерергә була.

Икенсенән, алда әйтелеүенсә, Салауат Юлаев ижадына һуңғы йылдарҙа яҙма сығанаҡтар аша килеп еткән бер нисә текст өҫтәлде. 1949—1950 йылдарҙа ғалим Ә. Усманов матбуғатҡа сығарған «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...», «Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылға» шиғырҙары, 1949 йылда атаҡлы тикшеренеүсе В. П. Бирюков рус телендә баҫтырған «Салауат Юлаев йыры», Башҡортостан Фәндәр академияһының ғилми архивында һаҡланған «Салауаттың һөйгән ҡыҙы Зөләйхаға йыр-

[1] Башкирия в русской литературе, т. 2. С. 128.

лаған йыры», «Салауаттың Уралға ҡарай йыры», «Салауаттың яуҙа яраланғас йырлаған йыры», текстологик күҙәтеүҙәр раҫлауынса, үҙҙәренең идея-эстетик йөкмәткеһе, фекер һәм образдар системаһы, айырым строфалары, юлдары, йә булмаһа бүтән үҙенсәлектәре менән шағирҙың тормошона, көрәшенә, ижадына туранан-тура мөнәсәбәтле. Улар авторҙың поэтик рухын, уй-ҡараштарын тағы ла киңәйтеберәк күҙ алдына баҫтыралар.

* * *

Салауаттың поэтик һүҙе уны изге яуға әйҙәгән идеалдарҙы тормошҡа ашырыусы ҡорал сараһын үтәне. Бер үк кешенең шағир һәм яугир кеүек тәү ҡарамаҡҡа ҡапма-ҡаршы сифаттарға эйә булыуы ул заманда үтә һирәк осрай торған хәл түгел ине. Төрки телле халыҡтар әҙәбиәтендә ундай шәхестәр тыуа торған. «XV—XVIII быуаттарҙа йәшәгән байтаҡ йыраусар, — тип яҙа ҡаҙаҡ ғалимы М. М. Магауин, — шағир ғына түгел, үҙ ҡәбиләләренең, улустарының, ҡәбиләләр союзының юлбашсылары һәм батырҙары ла булғандар» [1]. Көнсығыш ха-

---

[1] Магаукн М. Песни казахских степей. — Поэты Казахстана. Алма-Ата, 1978, С. 7.

лыҡтарындағы күп кенә күренекле әҙиптәрҙең әҫәрҙәре кеүек үк, Салауат Юлаев шиғырҙары төп нөсхәлә һаҡланмаған. Шуға ла уларҙың үҙгәреү дәрәжәһе тураһында йыш ҡына һорауҙар тыуып тора. Әлбиттә, ике быуат самаһы халыҡ араһында йөрөгән әҫәрҙәр беҙгә һүҙмә-һүҙ — сәсән-шағир тап үҙе әйткән йәки яҙған хәлдә — килеп етмәгән. Әммә, текстологик күҙәтеүҙәр күрһәтеүенсә, уларҙың поэтик төҙөлөшө һәм идея йөкмәткеһе ярайһы уҡ яҡшы һаҡланған. Хатта халыҡ телендә оҙаҡ йөрөгән, тимәк, ныҡыраҡ үҙгәрергә тейеш булған текстарҙың — йыр-импровизацияларының да тотороҡлолоғо хайран ҡалдыра. 1792 йылда, йәғни Салауат үҙе тере саҡта уҡ, ҡағыҙға теркәлгән йырҙар араһында шундай юлдар бар:

Әҙернә тарттым, уҡ аттым,
Беләккәйемә таяныи.
Йәш баштарымдан яу яуланым,
Бүгәсәү ҡартҡа ышаныи.

Бөгөнгө көндә халыҡ телендә Салауат авторлығында билдәле булған бер йыр ошо строфаға һүҙмә-һүҙ тигәндәй тап килеп тора.

Үткән быуаттың 60-сы йылдарында Р. Г.

Игнатьев яҙып алған икенсе бер йыр ҙа беҙҙең заманда һис бер үҙгәрешһеҙ тиерлек таралған:

Атайым да тиһәм — уғым аҙ,
Сабайым да тиһәм — алдым һаҙ.
Ян-яҡтарыма ҡараны иһәм,
Йән-юлдашҡайҙарым минең аҙ.

Бындай күренеште сәсәндәрҙең Салауат Юлаев ижадына айырым ихтирам йөҙөнән үтә һаҡсыл ҡарауы менән аңлатырға мөмкин. Сөнки шағирҙың телдән әйткән әҫәрҙәре беҙҙең быуатҡа, башлыса, сәсәндәр хәтере аша килеп еткән. Ә инде уның ҡулъяҙмаларҙа таралған шиғырҙарының үҙгәреү дәрәжәһе, әлбиттә, тағы ла аҙыраҡ.

Беҙгә Салауаттың поэтик әҫәрҙәренең иректә ижад ителгәндәре генә билдәле. Тимәк, уның ижади биографияһы 5—6 йыл менән генә сикләнә. Әммә ошо әҙ генә ваҡыт эсендә лә ул халыҡ телендә онотолмаҫ шиғриәте менән революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтенең түренән урын алды. Салауат тураһында һүҙ сыҡҡанда, беҙ уның кеүек үк ҡыҫҡа ижад ғүмере кисергән, әммә үҙ әҙәбиәттәре күгендә яҡты йондоҙ булып ҡалҡҡан төрлө халыҡ, төрлө быуын шағирҙарын — М. Лермонтовты, С. Есенин-

ды, Ғ. Туҡайҙы, Ш. Бабичты, Ғ. Сәләмде, М. Харисты, Ш. Фидаиҙы хәтергә төшөрергә мәжбүрбеҙ.

Салауатты шиғриәткә тәү башлап мөхәббәт тойғолары алып килә, уның беренсе әҫәрҙәре ҡатын-ҡыҙ гүзәллегенә һоҡланыу хистәре һөҙөмтәһендә тыуа. Р. Игнатьев вариантындағы «Зөләйха»ны, М. Буранғолов яҙып алған «Зөләйхаға йырлаған йыр»ҙы, В. Бирюков баҫтырған «Салауат Юлаев йыры»н Салауаттың иң тәүге ижад емештәре тип ҡарарға мөмкин: бында үҫмер егеттең тәү ҡат ғашиҡ булған ҡыйыуһыҙ, саф уй-тойғолары сағылдырыла. Шағирҙың теле мөхәббәт лирикаһы менән асылыуы уның Көнсығыш поэзияһы йоғонтоһон кисергәнлеге хаҡында һөйләй. «Зөләйха» шиғырының тәүге өлөшө, Көнсығыш классикаһындағыса, ҡатын-ҡыҙҙың сибәрлеген, буйһынын һоҡланып тасуирлай. Өҫтәүенә, авторҙың эске кисерештәрен әйтеп һалып, әҫәрҙе ҡулъяҙма өлгөләренән юғарыраҡ күтәреп ебәрә:

Мин, бахыр, һине, Зөләйха, нык һөйәм,
Әйтә алмайса һүҙҙәремде, баш эйәм.

Ҡатын-ҡыҙҙы кәмһетеп ҡарай торған шәриғәт ҡанундары йәшәп килгән бер мәлдә,

уға ерлекле реаль тойғолар аша үҙенең тәрән гуманистик ҡарашын белдереүе, ысын мөхәббәт алдында баш эйеүсе кешенең күңел сафлығын, типик кисерештәрен биреүе менән автор, ҡулъяҙма поэзия сиктәренән ары үтеп, ҙур фекер ҡыйыулығына ирешә алған. Лирик геройҙың тәүге һөйөү хистәрен сағылдырған бүтән шиғырҙарында ла ошо мотив асыҡ һиҙелә. Әйтергә кәрәк, мөхәббәт темаһы Салауат поэзияһында һөйгән ҡыҙға ғына ҡайтып ҡалмай, ә артабан ғаиләһенә, балаларына арналған әҫәрҙәрендә дауам ителә: Ф. Д. Нефедов очеркында килтерелгән хушлашыу шиғыры, Миңлеяза ҡыҙына, Зөләйхаға бағышланған йыр куплеттары инде байтаҡҡа һуңыраҡ — Крәҫтиәндәр һуғышы дәүерендә сығарылған. Уларҙағы төп һыҙаттар — авторҙың үҙ ғаиләһенә, балаларына оло һөйөү, тулҡынландырғыс хәстәрлек менән ҡарауы уның ҡулъяҙма документтары менән дә раҫлана. Өфө төрмәһендә ултырған саҡта иректәге яҡташтарына: «Ҡатындарыбыҙ һәм балаларыбыҙ хаҡында Ырымбурға хәбәр бирегеҙ: беҙҙе ҡәрҙәштәребеҙ ҡотортманы, шуға уларҙы азат итһендәр, тип яҙығыҙ. Әгәр быны губерна канцелярияһы эшләй алмай икән, се-

натҡа ебәрһен... Балаларҙың йәшен күрһәтегеҙ», — тип яҙа.

Күп тә үтмәй, Салауат Юлаев ижадында мөхәббәт хисе киңерәк сфераға күсә, авторҙың тауышы ла юғарыраҡ граждандыҡ тойғоһо менән яңғырай башлай. Хәҙер инде ул үҙе тыуып үҫкән мөһәбәт Уралдың матурлығын оло һөйөү менән тасуирлай («Уралым», «Тыуған илем», «Тирмәмдә», «Уҡ», «Салауаттың Уралға ҡарай йыры»). Йәш авторҙың пейзаж лирикаһы фольклорға һәм сәсәндәр ижады традицияларына бәйле. Туғандаш халыҡтар әҙәбиәтендә — ашуғтар, аҡындар шиғриәтендә тәбиғәт күренештәрен, тыуған ерҙең матурлығын һүрәтләү, пейзаж биҙәктәрен биреү ҙур урын тотҡан кеүек, башҡорт сәсәндәре сығарған героик эпостарҙа, ҡобайырҙарҙа, йырҙарҙа тыуған Уралға дан йырланмай ҡалған әҫәрҙәрҙе табыуы ҡыйын. Ошо традицияны Салауат артабан дауам иттереп, Тыуған ил тәбиғәтенә, Уралға маҡтау һүҙҙәре аша үҙенең күңелен, граждандыҡ тауышын, патриотик тойғоларын, фәлсәфәүи ҡараштарын асып һала. Ул пейзаж күренештәре менән генә сикләнеп ҡалмай, үҙенең һоҡланыу һәм ғорурланыу хистәрен Уралдың йәнле тәбиғәте өлкәһенә лә күсерә. Ҡобайырсы-йырсы

сэсэндэргэ тыуған яктың хатта «майлап ҡуйған ҡамыштай йыланы» ла ҡәҙерле икән, Салауатҡа, әлбиттә, төнгө тынлыҡта һайраған һандуғас тауышы, ҡанатына уҡ тейгән гонаһһыҙ ҡарлуғас ғүмере ғәзиз:

Шул саҡ тирмәм ишеген
Асырға ҡуштым.
Төн буйы тыңланым моңон
Һандуғас ҡоштоң.

Йәки:

Аяҡҡайым янына ҡолап төшкәс,
Меҫкен ҡошто йәлләп юҡһынам.

Был ҡошсоҡтарҙың ғәзиз ғүмере — автор өсөн тыуған тәбиғәт, тыуған ил ғәзизлеге. Тәбиғәт күренештәрен һүрәтләү, күңел кисерештәрен асыуҙа ҡулайлы сара булараҡ, Салауаттың бүтән осорҙағы әҫәрҙәренә лә юлдаш булды. Әммә пейзаж лирикаһы уның ижадының айырым бер баҫҡысын тәшкил итте һәм авторҙы художестволы фекерләү оҫталығы йәһәтенән юғарыраҡ күтәрҙе. Тәбиғәткә дан йырлау аша ул үҙенең тыуған иленә, халҡына мөхәббәтен асып һалды, рух иреклеген күтәреп сыҡты.

Крәҫтиәндәр һуғышының күренекле пол-

ководецы дәрәжәһенә ирешә алған шәхестең поэтик ижадында хаҡлы рәүештә төп урынды ҡаһарманлыҡ лирикаһы биләй («Яу», «Егеткә», «Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылға...», «Салауаттың яуҙа яраланғас йырлаған йыры», «Бүгәсәүгә ҡушылып, ирбатырға ҡуш булып...» һ. б.). Авторҙың яңынан-яңы темаларға ынтылыуы лирик геройҙың характер һыҙаттарын төрлө яҡлап асыуға ярҙам итте, уны бай хисле, ташып торған энергиялы, урыны менән ҡапма-ҡаршылыҡлы кисерештәр донъяһында йәшәгән, ысынбарлыҡтағыса реаль образ итеп кәүҙәләндерҙе. Һылыу ҡыҙ гүзәллеге алдында юғалып, телһеҙ ҡалған лирик герой уҡыусы алдына яу шарттарында бөтөнләй икенсе сифаттары менән килеп баҫа. Салауаттың ҡаһарманлыҡ поэзияһын яҡынса хронологияға бүлеп ҡарап, ошо бәләкәй генә этапта ла шағирҙың поэтик оҫталығы үҫә төшә, ҡараштары тағы ла киңәйә барыуын күҙәтә алабыҙ.

Мөхәббәт утында янған, тыуған ер хозурлығы менән һоҡланып туя алмаған оло хисле лирик геройға ҡаһарманлыҡ тойғолары тәү башлап дини-дидактик дастандарҙағы батырҙарҙың тәүәккәл эштәре аша килә. «Яу» исеме менән йөрөтөлгән ши-

ғырҙан күренеуенсә, үҙ заманы әҙәбиәтендәге Ғәли, Әбүталип, Сәми һ. б. батырҙарҙың дәһшәтенән рухланып, ул үҙе лә атын эйәрләп көрәшкә күтәрелә, беренсе осраған күмәк дошманды яңғыҙы ҡыйрата.

Мин ҡыйраттым дошман сафтарын,
Өс йөҙ дошман һөжүм иттеләр.
Бик күптәре аяҡ аҫтында
Кәүҙәләрен тупраҡ иттеләр.

Дастан йоғонтоһо әҫәрҙең йөкмәткеһендә ныҡ һиҙелә: авторҙың идеалы — реаль көстән бигерәк, тылсымлы дәһшәт менән еңеүгә ирешкән батыр образы.

Ә инде артабанғы әҫәрҙәрендәге батырлыҡ төшөнсәһе шағир аңында конкретыраҡ төҫ ала, лирик геройҙың ҡайһы бер һыҙаттары автор шәхесенең үҙендә булған сифаттар менән яҡыная. «Салауаттың яуҙа яраланғас йырланған йыры»нда «ыласындай төҫлө батырҙар ҙа бер төшмәһә аттан бер төшә», тип, яңғыҙ һуғышсының ғәйрәте сикһеҙ түгеллеге танылһа, «Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылға»... тип башланған шиғырҙа батырҙы батыр иткән, көрәште еңеүгә килтергән төп көстөң халыҡ икәнлеге аңлашыла. Яутир ир-егеттәрҙе генә түгел, ҡартын да, йәшен дә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла

еңеү өсөн үҙ өлөшөн индерергә саҡыра автор.

Ғерой-шағирҙың ҡаһарманлыҡ поэзияһы эсенә ингән шиғырҙары араһынан күләме, әһәмиәте һәм билдәлелеге яғынан үҙәк урынды «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» әҫәре биләй. Ул, йөкмәткеһенә ҡарағанда, Салауат Ырымбур янында Пугачевты күреп ҡайтҡандан һуң, восстаниеның Башҡортостанда ҡыҙыу төҫ алған мәлендә, халыҡты яуға саҡырыу эшмәкәрлеге менән шөғөлләнгән дәүерҙә, ижад ителгән булырға тейеш. Йәш батырҙың хәрби етәкселек һәләте, тормош тәжрибәһе үҫеүе менән бергә, поэтик оҫталығы ла камиллаша бара. Хәҙер инде уның лирик геройы авторҙың эске донъяһын тулыһынса сағылдыра, батыр һуғышсы һәм талантлы сәсән булараҡ ижтимағи ролен аныҡ билдәләй.

Салауат үҙенең сәсәнлек бурысын яуҙағы ысын батырлыҡ һәм халыҡ мәнфәғәттәре критерийынан сығып баһалай:

Батырмын, тип кем әйтмәй, —
Яу килгәндә йүне юҡ;
Сәсәнмен, тип кем әйтмәй, —
Дау килгәндә өнө юҡ.

Был һүҙҙәрҙә Салауаттың тәүге ижад осоронан уҡ башланған ҡыйыу фекер йөрөтөү ҡеүәһенең үҫә, нығына барыуын күрмәү мөмкин түгел. Шағир үҙенең шәхси һыҙаттарын, бары тик үҙ характерын ғына сағылдырыуҙан уҙып, бөтә халыҡ исеменән фекер йөрөтөү дәрәжәһенә күтәрелә. «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» әҫәренең халыҡ араһында киң таралып китеү һәм ҙур күләмле килеш һаҡланыу сәбәптәренең береһе — ҡобайырҙар кеүек оло патриотик рухлы булыуы, замандаштарының уй-ҡараштарына яҡынлығы менән аңлатыла. Хәҙерге заман шағирҙары үҙҙәренең ятҡан шиғри репертуары менән йыш сығыш яһаған кеүек, Салауат та был әҫәрен халыҡ алдында ҡат-ҡат һөйләп, йөкмәткеһен камиллаштыра барған булырға тейеш. Киң ҡатлам тыңлаусылар даирәһендә бүтән сәсәндәр тарафынан уны ятлап алыу мөмкинлеге лә артҡан. Тотош иҫтә ҡалдырырға поэтик һәләте етмәгән кеше йөкмәткеһен хәтерләп ҡалған һәм үҙенән һуңғы быуындарға таратҡан. Бөгөнгө көндә «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» шиғри һәм сәсмә варианттарҙа осрай, уларҙың йөкмәткеләрендә ҙур айырма юҡ — ваҡ деталдәренә тиклем

əҙмə-əҙ тап килеп тора. Халыҡ араһында киң танылған был әҫәрҙең айырым строфалары йырҙар репертуарына күскән. «Күк ыласындың балаһы бауҙа үлә талпынып, яҡшы атаның балаһы шәһит үлә яу йөрөп» тигән юлдар 1870 йылда уҡ А. Покровский баҫтырған «Башҡорт һәм татар йырҙары» тексы араһына килеп инә. Салауат шиғырҙарындағы яуҙа ҡорбан булған ир-егет батырлығын данлаусы юлдар ҡаҙаҡ толғауҙарында үҙгәрешһеҙ осрай. 1970 йылда профессор Ә. Харисов Силәбе өлкәһендә яҙып алған бер ҡобайырҙың һигеҙ юллыҡ тәүге строфаһы ла яугир шағирҙың ошо әҫәрендәге айырым урындарға һүҙмә-һүҙ тура килә.

Ғөмүмән, Салауат Юлаев восстание осорондағы үҙенең бөтә ижадын яу героикаһына, хәрби эшмәкәрлегенә буйһондорған, уның ҡаһарманлыҡ поэзияһы политик пропаганда, агитация хеҙмәтен үтәгән. Халыҡ йырҙары нигеҙендә Р. Игнатьевтың: «Ул йыр йырлаһа, кешеләр һуғышҡа ҙур теләк менән барҙылар, яраларының ауыртыуын тойманылар, аслыҡтан да, һыуыҡтан да, хатта йәҙрә, ҡылыс, штык үлеменән дә ҡурҡманылар, шатлыҡ менән үлделәр», — тип әйткән һүҙҙәре «Бүгәсәүгә ҡушылып,

ир-батырға ҡуш булып...» кеүек ҡобайыр стилендә яҙылған, фольклор һәм сәсәндәр ижады традициялары менән һуғарылған әҫәрҙәрҙе күҙ уңында тотҡан булһа кәрәк.

Халыҡ йыры тибындағы берәр строфалыҡ импровизациялары Салауат ижадының һуңғы осорона ҡарай. Быны уларҙың йөкмәткеһенән дә еңел төҫмөрләп була: Башҡортостан территорияһында Крәҫтиәндәр һуғышының инде тамам һүрелгән сағынан алып каторгаға оҙатылғанға тиклемге осорҙа Салауат аңынан үткән уйланыуҙар, кисерештәр күҙ алдына баҫа. Дәһшәтле яу эпизодтарын ҡабат-ҡабат хәтергә төшөрөп, һығымта яһарға ынтылған юлдар ҙа бар:

Алмаған да завод, ай, ҡалманы,
Ала алманым Оло Ҡыштауҙы.

Был төркөмгә ингән әҫәрҙәрҙең үҙҙәренә генә хас үҙенсәлеге күренә. Конкрет ваҡиға йәки тетрәткес кисереш тәьҫирҙәренән сығып, һәр куплет үҙ аллы ижад ителгән, уларҙың һәр ҡайһыһы тамамланған, бөтөн йөкмәткене тәшкил итә. Мәғәнә буйынса бер-береһенә бәйләнеп, ялғанып килгән ике куплет бөтөнләй юҡ тиерлек. Халыҡ телендә теге йәки был йырҙың үҙ тарихы йәшәп килгән кеүек, айырым куплеттарҙың

ниндәй хәл-ваҡиға айҡанлы сығарылыуы тураһында легендалар ҙа бар. Строфалар үҙаллылығының билдәле бер сәбәбе — Салауаттың йырҙары импровизация һөҙөмтәһендә, йөрәк тибеше кеүек, тулҡын-тулҡын булып, күңелдән урғылып сығыуында, күрәһең. Әйтергә кәрәк, был типтағы әҫәрҙәрҙе бөтөн циклға берләштергән дөйөм һыҙаттар ҙа табыла. Берҙән, уларҙың шиғри үлсәме халыҡ йыры ҡалыбында булһа, өҫтәүенә, йөкмәткеләрендә ваҡиға һәм уйфекерҙең аныҡ бер объектҡа бәйлелеге ярылып ята. Үҙгәрә килә дөйөм мәғәнә алған юлдарҙың да иң тәү варианты конкрет ерлек менән сығарылған булырға тейеш. Әйтәйек:

Ҡаршы ла килгән яу дошманын
Ҡуй һарығы кеүек әйҙәнем, —

тигән текстың хәҙер халыҡ хәтеренән сыға барған икенсе бер варианты ла билдәле:

Йүрүҙән заводы ғәскәрен
Ҡуй һарығы кеүек әйҙәнем.

Тәү ҡарамаҡҡа йырҙарҙа авторҙың фәҡәт шәхси кисерештәре — һағышлы уйла-

һыуҙары, хәтерләүҙәре, хаталарын иҫкә төшөрөп өҙгөләнеүҙәре — тасуирланған һымаҡ. Әммә улар ҡайғы-хәсрәтле тонда кеүек күренһәләр ҙә, Салауаттың халыҡ көсөнә тәрән ышанғанлығын сағылдыралар, лирик геройҙың ялҡынлы патриот икәнлеген раҫлайҙар. Яугир-шағирҙың конкрет объекттарға төбәп поэтик фекер йөрөтөүе аша уның бөтә ижтимағи һәм хәрби эшмәкәрлеге дөйөмләштерелә.

Темалар киңлеге бында фекер тәрәнлеге менән бергә ҡушыла. Мәҫәлән, Башҡортостан ерендә хөкөм һөргән социаль ҡаршылыҡтар шағир аңында тағы ла асығыраҡ һүрәтләнә:

Эҫем буйҡайҙарын баяр баҫты,
Йөрәккәйем шуға ла зар-һағыш.

Тыуған яҡтарынан айырылып тороу авторҙы тәбиғәт матурлығы менән элекке кеүек бер ҡатлы һоҡланыу хистәренән ары уҙҙыра, хәҙер инде Салауаттың лирик геройы үҙ еренең һәр мөйөшөн ожмахтай күреп, өҙөлөп һағына:

Иҫтәремдән сыҡмай Уралҡайым,
Шишмәләре, сәхрә, туғайы.

Йәннәт төçөн биргән сәскәләрҙе,
Һандуғастай моңло ҡурайы.

Тыуған тәбиғәткә мөнәсәбәте менән бергә геройҙың патриотик тойғолары ла көсәйә. Ил, халыҡ һәм уның киләсәге өсөн борсолоу сәсән-шағир ижадында тағы ла асығыраҡ төç ала. Восстание еңелеп, яугир дуçтары дошман ҡулына төшкән хәлдә лә Салауат оптимистик ҡараштарынан һүрелмәй, үҙенең ҡылған эштәренең хаҡлығына шикләнмәй, хатта артабан бәхетле көндә ниндәй юлдар менән яуларға кәрәклеген дә әйтеп бирә:

Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ,
Батыр ирҙәр тыуыр тағы ла.

Лирик геройҙың һөйөү хистәрен сағылдырған юлдарҙа ла шундай уҡ үҙгәреште һиҙәбеҙ. Элек тәүге мөхәббәт утында янған йәш егет һылыу ҡыҙҙың фәрештә кеүек буй-һыны алдында бөтөнләй юғалып ҡалһа, әле һөйөклө ҡатынына ҡарата ғазаплы хистәр менән тулған йөрәген тотошлай асып һала:

Минән дә артыҡ Зөләйханы
Кемдәр һөйәр икән яратып?

Ғаилә һәм тыуған ил төшөнсәләре автор аңында бергә ҡушыла:

Ҡәҙерлеләй ғаиләм, һөйгән йәрем,
Изге генә тыуған илкәйем.
Һеҙҙе тағы ташлап китермен, тип
Түгеләлер күҙҙән йәшкәйем.

Күренеүенсә, йырҙарҙағы уй-кисерештәр авторҙың шәхси мотивтарына ғына ҡайтып ҡалыуҙан бөтөнләй алыҫ: киреһенсә, тыуған ер һәм халыҡ өҫтөнә төшкән ҡайғы-хәсрәтте күңеленә яҡын алып, үҙен шуларҙың айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп тоя.

Әйтер һүҙен йөрәк аша үткәреп, нескә лиризм менән һуғарып биреү — Салауаттың бөтә ижадына хас төп һыҙаттарҙың береһе. Тәү сиратта импровизатор булып, әҫәрҙәрен халыҡҡа үҙ исеменән һөйләгәнгә, автор кисерештәрен лирик геройҙыҡы менән тулыһынса тап килтерә. Шуға ла һәр бер шиғыр йәки йыр юлында шағирҙың үҙ шәхесен раҫлаусы поэтик «мин» көсө ярылып ята. Дөйөм халыҡ ҡарашынан, уның мәнфәғәттәренән сығып фекер йөрөтөүе һөҙөмтәһендә Салауаттың һуңғы осорҙағы ижады халыҡ йырҙары менән бергә ҡушылып, безгә йыр репертуары менән аралашып килеп етте.

Салауат Юлаев шиғриәтендәге уй-фекерҙәрҙе ҡулъяҙма документтар тулылап килә. Бөгөнгө көндә беҙгә Салауат Юлаев ҡултамғаһы һалынған ике тиҫтәгә яҡын документ билдәле. Күпселеге Крәҫтиәндәр һуғышының беренсе этабына ҡарай һәм указ, бойороҡ, өгөтнамә, билет, ордер, хат һ. б. яҙмаларҙан тора. 4 текст баш күтәреүселәр полковнигы И. С. Кузнецов, 2-һе — Ҡәнзәфәр Усаев, 1-һе Юлай Аҙналин менән берлектә яҙылған. Был ҡағыҙҙарҙың йөкмәткеһендә сәсән һүҙе ишетелә, улар замандың ҡоро теле менән яҙылған рәсми ҡағыҙҙарҙан айырылып торалар. Салауат ни тиклем ҙур ғәскәр менән етәкселек итһә лә, уның күңеленә шағирҙар тәбиғәтенә генә хас айырым бер мәрхәмәтлелек юлдаш булып килә. Был сифат һәр документта тиерлек сағылыш тапҡан. 1774 йылдың ғинуарында Көнгөр ҡалаһын ҡамап торғанда, уның хакимдарына: «Ғәйепһеҙ халыҡты һуңғы сиккә тиклем туҙҙырыуға дусар итмәгеҙ», — тип яҙа. Ә Ҡатау заводы эшселәренә: «Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ. Беҙгә бер-беребеҙ менән бәхәсләшеп, бер-беребеҙҙе бөлдөрөшөп торорға мөмкин түгел», — тип мөрәжәғәт итә. Герой-шағир ҡулъяҙмалары хистойғоларға бай, образлы сағыштырыуҙар

менән һуғарылған. Уларҙа замандың бүтән сәсмә әҫәрҙәренә хас булған дөйөм һыҙаттар ҙа табыла. Әйтәйек, патриотик рухы һәм социаль үткерлеге менән был документтар 1755 йылғы Башҡорт восстаниеһы етәксеһе Батырша Әлиевтең императрица Елизавета Петровнаға яҙған күренекле хаты менән бик ауаздаш. Ғөмүмән, ҡулъяҙма документтарҙы Салауат Юлаевтың әҙәби мираҫының айырылғыһыҙ бер өлөшө тип ҡарарға кәрәк.

Салауат ижады башҡорт фольклоры, үҙ заманының ауыҙ-тел һәм ҡулъяҙма әҙәбиәте тупрағында ҡалҡып сыҡты. Уның әҫәрҙәренең формаһы ла, йөкмәткеһе лә, образдар системаһы ла осорҙоң традицияларына бик яҡын тора. XVIII быуат башҡорт әҙәбиәтендә сәсәндәрҙең ауыҙ-тел ижады, ҡулъяҙма поэзия һәм художестволы публицистикаға тартым проза киң таралған икән, ошо уҡ төрҙәр, күреп үтеүебеҙсә, герой-шағирҙың әҫәрҙәрендә лә төп урынды биләй. Ҡобайырҙарҙа сәсәндәр Урал образын башҡорттарҙың тыуған төйәге, тыныслыҡ һәм именлек терәге итеп күрһә, Салауаттың импровизацияларында һәм ҡулъяҙма шиғырҙарында ла был һүҙгә шундай уҡ мәғәнә һалынған. Фольклор арсеналында һәм

заман әҙәбиәтендә айырыуса киң таралған бүтән традицион образдар ҙа уның ижадында киң урын тапты. Ир-егеттең ҡанаты, яуҙарҙа тоғро юлдашы булған толпар атты ла, героик эпостарҙағы уҡ-һаҙаҡты ла, йырҙағы һандуғасты ла, әкиәттәге илһамлы шишмәне лә, береһенән-береһе ҡыйғырыраҡ ҡоштарҙы ла, хәбәрсе елде лә табырға мөмкин. Ошолар менән бер рәттән, Көнсығыш баҫма әҙәбиәте, күрше туғандаш халыҡтар ижады йоғонтоһонан ингән хур ҡыҙы, ай, йондоҙ, диңгеҙ, балаҫ, аждаһа, шайтан, сихырсы, ожмах һ. б. кеүек традицион образдар бар.

Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылғандан һуң, билдәле булыуынса, Екатерина II 1775 йылдың 17 мартында махсус указ сығарып, пугачевсыларҙың исемен мәңгегә онотоуға дусар итергә тырыша. Башҡортостанда Салауат Юлаевтың исеме лә тиҫтәләгән йылдар буйы бик һаҡлыҡ менән генә иҫкә алына. Ләкин халыҡ барыбер уның ижадын онотмай — быуындарҙан быуындарға тарата. Быға артабанғы быуын сәсәндәренең ныҡышмалы эшмәкәрлеге лә, Салауаттың үҙ ижадының заманына күрә юғары художестволы камиллә булыуы ла ярҙам итә.

Поэзияға Салауат индергән яңылыҡ, асылда, киләһе быуындарҙың сәсәндәре, шағирҙары өсөн традиция вазифаһын үтәне. Салауаттан һуң йәшәгән һәм ижад иткән сәсәндәр, һөнәрҙәренең борондан уҡ килгән традицияһы буйынса, үҙҙәренә тиклемге һүҙ оҫталарының әҫәрҙәрен хәтерҙәрендә ҡәҙерләп һаҡлау менән бергә, уларҙың поэтик өлгөләренә иркен таяныр булғандар. 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғаларына ҡарата Байыҡ Айҙар сәсән дөйөм Рәсәй мәнфәғәттәре күҙлегенән ижад иткән «яҡшы атҡа менеп, һөңгө тотоп, батыр башҡорт сығыр элгәре» һымағыраҡ интернациональ рухтағы юлдарҙың идея сығанағы, беҙҙеңсә, Пугачев восстаниеһы шауҡымына барып тоташа. Ғөмүмән, Байыҡ Айҙар сығарған ҡобайырҙар Салауаттың заманы, шәхси тормошо, көрәше, ижады менән туранан-тура бәйле. Бер үк осорҙа йәшәгән был ике талантлы сәсән бер-береһенең ижадтарына үҙ-ара йоғонто яһаған.

Башҡорт халыҡ йырҙары репертуарында ҡасҡындар йәки һөргөнгә ебәрелгән ирҙәр тураһындағы текстарҙың айырым куплеттары Салауат йырҙарына ауаздаш. Үҙҙәренең михнәтле яҙмышы тураһында йырлаған ҡасҡындар Салауат ижады менән

яҡындан таныш булмаһалар ҙа, батырҙың халыҡ телендә йөрөгән әҫәрҙәре уларға килеп ишетелмәй ҡалмағандыр. Был циклдағы ир-егет батырлығы һәм уның тормоштағы тотҡан урыны, социаль тигеҙһеҙлек, колониаль иҙеү хаҡында уйланыу мотивтары һалынған юлдар тәү башлап яугир-шағир аңынан сыҡҡан уй-хистәрҙе бик ныҡ хәтерләтә. Ә инде «Ғүмәров» исемле йырҙағы «Ишегемде асып ҡуйығыҙ, ялан ерен күреп ятайым» тигән һүҙҙәр Салауаттың: «Шул саҡта тирмәм ишеген асырға ҡуштым...» — тип башланған лирик юлдары менән бөтөнләй яҡын.

Салауат Юлаев кеүек бер үк шәхестә сәсән һәм шағир һыҙаттарын туплау XIX—XX быуатта М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев һәм бер төркөм мәғрифәтсе әҙиптәр ижадында дауам ителде. Герой-шағир поэзияһы менән типологик оҡшаш мотивтар күрше төрки телле халыҡтар әҙәбиәтендә, атап әйткәндә, ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡ халыҡтарының яугир шағирҙары ижадында ла асыҡ күренде.

Йомғаҡлап әйткәндә, Салауат Юлаевтың ижады Башҡортостан тарихында, уның милли мәҙәниәте үҫешендә тәрән эҙ ҡалдырҙы. Уның әҫәрҙәренең эстетик әһәмиәте

быуаттар һынауын үтеп сыкты, бөгөнгө көндә бөтә донъя классик поэзияһы рәтенән урын алды: шиғырҙарының иң яҡшы өлгөләре 200 томлыҡ «Донъя әҙәбиәте китапханаһы» серияһында баҫылды[1].

*Мирас Иҙелбаев,*
***филология фәндәре кандидаты***

---

[1] Поэзия народов СССР IV—XVIII веков. Библиотека Всемирной литературы. М., 1973. С. 543—547.

*Михнәт менән көн күргәнсе,*
*Үҙе үлмәйек дан менән!*

# *Уралым*

Ай, Уралым, Уралым,
Күгәреп яткан Уралым!
Нурға сумған түбәһе
Күккә ашкан Уралым!
Һине маҡтай йырҙарым,
Һине данлай йырҙарым.

Төнөн күккә ай ҡалҡһа,
Алтындай балҡый Урал тау,
Көндөҙ күккә көн ҡалҡһа,
Көмөштәй балҡый Урал тау.

Биттәреңдә, Урал тау,
Ҡамыштай ҡарағай урманың,
Итәгеңдә, Урал тау,
Баластай болон-ҡырҙарың.

Күҙҙең яуын алалар
Аҡ, һары, ал сәскәләр.
Сәскәләр менән һандуғас
Тәңрегә тәсбих әйтәләр.

Ҡыҙарып ҡалҡҡан ҡояшты
Һайрап ҡаршылай ҡоштарың,
Тонйорап батҡан ҡояшты
Һайрап оҙата ҡоштарың.

Ай, Уралым, Уралым,
Һылыу ҙа һылыу Уралым!
Һүҙем бөтһә лә телемдә,
Йырым бөтмәне, Уралым!

Маҡтап ҡурай уйнаһам,
Бөтмәй ҙә торған көй булыр,
Данлап йырым йырлаһам,
Бөтмәй ҙә торған йыр булыр.

# Һандуғас

Төнгө тынлыҡ. Ағаслыҡта
Һандуғас моңо.
Күктеме, ерҙеме данлай?
Кем белә уны.

Йырлаймы күктә балҡыған
Ҡояштың нурын?
Әллә айға арнағанмы
Һандуғас йырын?

Әллә арналғанмы ул йыр
Яҡты йондоҙға,
Йәйрәп ятҡан яландарға,
Хәтфә болонға? —
Мин белмәйем.

# Тирмәндә

Тирмәм тора көмөш кеүек
Йылға ярында.
Хуш еҫле сәскәләр үҫә
Тирә-яғында.

Көтөүҙәр йөрөй. Мин үҙем
Ятам тирмәмдә.
Туғандарым, яҡындарым
Минең эргәмдә.

Шул саҡта тирмәм ишеген
Асырға ҡуштым.
Төн буйы тыңланым моңон
Һандуғас ҡоштоң.

Ниндәй яҡшы, ниндәй татлы
Булды бөгөн көн.
Керпек тә ҡаҡмай үткәрҙем
Ошо төндә мин.

## Ук

Һауаларға ук сойорғоттом,
Ҡарлуғасҡа тейҙе уҡҡынам.
Аяҡҡайым янына ҡолап төшкәс,
Меҫкен ҡошто йәлләп юкһынам.

Һауаларға атҡан уҡҡайым
Тау, урмандар аша уҙһасы.
Ҡарлуғасҡай ҡошто үлтергәнсе,
Бер дошмандың йәнен өҙһәсе.

# Яу

Заманалар булған элгәре,
Булған илдең батыр улдары.
Баш етмәҫлек эштәр эшләгәндәр,
Бөтә ғәләм белгән уларҙы.

Ғүмер буйы йөрөп яуҙарҙа,
Йыйған улар һанһыҙ дуҫтарҙы.
Еңгән улар бик күп батырҙарҙы,
Ҡырған улар һанһыҙ дошманды.

Ҡурҡмағандар сихырсынан,
Аждаһалай уҫал яуыздан,
Ен-пәрейҙең мәкер-хәйләһенән,
Йылан сәсә торған ағыуҙан.

Рухым күтәрелде минең дә,
Эйәрләнем мин дә атымды.
Дошман сафын тар-мар итергә
Изге яуға уктай атылдым.

Мин ҡыйраттым дошман сафтарын,
Өс йөҙ дошман һөжүм иттеләр,
Бик күптәре аяк аҫтында
Кәүҙәләрен тупраҡ иттеләр.

Яуыз дошман яуы эсенән
Атым алып сыҡтым аҡланға.
Аҡландағы йылға ситендә
Ултырып тәсбих әйтеп аллаға,
Изге яуға тағы барам мин,
Азатлыҡ һәм шөһрәт табам мин.

# Егеткә

Бейектә оса ҡоҙғон ҡош,
Унан бейек осор ыласын бар.
Ыласындан да бейек оса торған
Ҡош батшаһы — ҡыйғыр бөркөт бар.

Шул бөркөттәй, егет, батыр бул,
Тайғанында таян дуҫтарға.
Яуҙа, арыҫландай ажғырып,
Йән аямай ташлан дошманға.

# Зөләйха

Зөләйха, һин ергә ингән хур ҡыҙы,
Күҙҙәреңдә балҡый Зөһрә йондоҙо.

Күҙҙәрең, гүйә, төндәге күк йөҙө,
Яҡтыра шул күҙҙәреңдә ай үҙе.

Ер хуры һин йәки оҗмах шәүләһе,
Һындарың, гүйә, фәрештә кәүҙәһе.

Мин, бахыр, һине, Зөләйха, ныҡ һөйәм,
Әйтә алмайса һүҙҙәремде, баш эйәм.

Һиңә дан йырлар өсөн телем зәғиф,
Һөйөүемде әйтергә һүҙем зәғиф.

Зөләйха, һин ерҙә йөрөгән хур ҡыҙы,
Күҙҙәреңдә яңа күктең йондоҙо.

## *Тыуған илем*

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым, —
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.

Күтәреп күккә үрелгән
Ҡарлы башын Уралдың,
Күҙҙең яуын алырҙай
Матурлығын ҡырҙарҙың
Мәңге маҡтар инем мин,
Мәңге данлар инем мин.

Тыуған-үҫкән илемдән
Яҙмышым йыраҡ ташлаһа,
Һеҙҙе һағынып өлгөрәм,
Төшөмдә һеҙҙе гел күрәм,
Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Һөйгән һылыу Уралым.



ПРЕДСТАВЯМЕ ВИ:

# Салават Юлаев –

## национален герой на Башкирия

### Родна страна

[illegible]

### Стрела

[illegible]

От башкирски

Иван ИВАНОВ

Салауаттың Софияла болғар телендәге гәзиттә сыҡҡан шиғырҙарынан, 1982 йыл.

Тыуған яктан ел иҫһә,
Ул миңә хәбәр килтерә,
Тыуған-үҫкән еремдән,
Өҙөлөп һөйгән илемдән, —

Минең тыуған ҡырҙарҙан,
Балдай татлы һыуҙарҙан,
Яландарҙан, урмандан,
Күккә ашҡан Уралдан
Миңә хәбәр килтерә.

* * *

Ҡәҙерлеләй ғаиләм, һөйгән йәрҙәр,
Изге генәй тыуған илкәйем.
Һеҙҙе шулай ташлап китерменме,
Түгеләләр күҙҙән йәшкәйем.

Айырылыуҡайҙарҙы уйлаһам мин,
Күҙҙәремдән аға йәшкәйем.
Татлы ғына йәшем түкмәҫкә лә
Етмәҫ һымаҡ кеүек көскәйем.

* * *

Юлһыҙ ғына ерҙән юлдар ярып,
Ҡайтып киләм, тауҙар артылып.
Эй, һағындым, йәнем, ер еләгем,
Күҙ алдымдан китмәй балҡыуың.

Таңдарымда миңә ҡояш баҡты,
Юл күрһәтте йондоҙ төндәрҙә.
Көнөн-төнөн елəм тынғы белмәй, —
Иҫән-һауҙар микән илдәрҙә?

Әминәкәй көтөп ҡаршы алыр,
Рамазаным булыр ҡулында.
— Һаумы, улым, һаумы, Рамазаным,
Йәндәр аттым һин тип юлымда.

## Бүгәсәүгә ҡушылып,
## ир-сатырға ҡуш сығыш...

**Алыҫ та алыҫ ерҙәрҙә,
Беҙ күрмәгән илдәрҙә
Дон тигән йылға бар икән.
Йылғала йөҙгән балыҡҡа,
Эшләп көн күргән халыҡҡа,
Тирҙәрен түккән улдарға,
Ай кеүек һылыу ҡыҙҙарға
Донда ла тормош тар икән,
Унда ла тормош тар икән.**

**Дон буйынан ҡуҙғалып,
Яҡ-яғына күҙ һалып,
Бүгәсәү тигән бер батыр,
Йәмәлкә тигән ир-батыр,
Сал бөркөттәй саңҡылдап,
Янған уттай ялҡынлап,
Халыҡҡа оран ташлаған,
Ялпыға хитап ташлаған.**

**Тауҙарҙы үткән был хитап,
Һыуҙарҙы кискән был хитап,
Бүгәсәү батыр янына
Ғәскәр килгән бихисап.**

# Салауат Юлаев

## *Жорық жырлары*

Башқұрт тілінен аударған
*БЕРҚАЙЫР АМАНШИН*

«ЖАЗУШЫ» БАСПАСЫ
Алматы — 1983

1983 йылда Алматыла ҡаҙаҡ телендә сыҡҡан Салауат Юлаевтың шиғырҙар йыйынтығының титул бите.

Эйәрләп, атҡа менгән дә,
Биленә ҡылыс элгән дә,
Бүгәсәү тигән шул батыр,
Йәмәлкә тигән ҙур батыр,
Арыҫландай ажғырып,
Юлында ҡойон яндырып,
Түрәһе менән батшаның,
Баяры менән батшаның,
Байҙары менән батшаның,
Һанаты менән батшаның
Алыш та атыш башлаған.

Дуҫтарын йыйған Бүгәсәү,
Дошманын ҡырған Бүгәсәү,
Һуғышта алған дан менән
Яйыҡҡа еткән Бүгәсәү.

Аңлағыҙ ошо телмәрҙән:
Ул миңә хәбәр ебәргән,
Бығаулының ҡулынан
Бығауын йолҡам, тигән ул,
Тышаулының аяғынан
Тышауын йолҡам, тигән ул;
Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа
Ерен бирәм, тигән ул;
Һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа
Һыуын бирәм, тигән ул;

Ҡол булып килгән башҡортҡа
Иркен бирәм, тигән ул.
Башҡорттар үҙ ерендә,
Тыуған-үҫкән иләндә,
Ҡош булып, күккә менһендәр,
Балыҡтай һыуҙа йөҙһөндәр,
Боландай ерҙә елһендәр, —
Ана шулай тигән ул.

Хәбәрем бар күп ерҙәрҙән,
Батыр ҙа батыр ирҙәрҙән:
Тамъян, Ҡатай, Бөрйәндән,
Юрматы, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән,
Таңғауырҙан, Ҡатайҙан,
Йәшенән, ҡарт атайҙан, —
Бары ла әҙер торалар.
Бары ла уҡ-ян ҡоралар.
Ауыҙ эсендә тел йөрөй,
Тел осонда һүҙ йөрөй:
Аҫыл алтын сапанлы
Батша, тиҙәр, Бүгәсәү;
Аҫыл көмөш эйәрле
Атта, тиҙәр, Бүгәсәү.
Аҫыл алтын сапанлы
Батша булһа ла Бүгәсәү,
Аҫыл көмөш эйәрле
Атта булһа ла Бүгәсәү,
Баяр башын ҡыя икән,

Һанат башын ҡыя икән,
Ирек алып килә икән,
Ер, урман, һыу бирә икән, —
Башҡортҡа ана шул еткән.

Йыл артынан йыл үтте,
Ҡыш булды ла боҙ китте.
Нисәмә йылдар буйына,
Ҡамыт кейгәндәй муйынға,
Бөркөттәй саңлар заманда
Тыныс тороп ҡараныҡ;
Бай, түрәләр ни ҡушһа,
Шуны эшләп ҡараныҡ;
Ни һораһа бай, түрә,
Шуны биреп ҡараныҡ.
Билде лә бөктөк хеҙмәттә,
Тирҙе лә түктек хеҙмәттә;
Алтын да биреп ҡараныҡ,
Атын да биреп ҡараныҡ.

Түрәнең тамағы туйманы,
Йәбер-золомон ҡуйманы;
Меңәрләп малды ҡыуҙылар,
Йөҙәрләп йәнде ҡыйҙылар;
Ил ағаһы ирҙәрҙең
Күҙенә ҡурғаш ҡойҙолар;
Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы
Ҡол итеп ситкә ҡыуҙылар.

Ҡан һауҙы инде күҙебеҙ,
Бөттө инде түҙемебеҙ!
Бугәсәүгә ҡушылып,
Ир-батырға ҡуш булып,
Казактарға иш булып,
Яуға сығыр көн етте,
Ирек яулар көн етте!
Туй барғанда, түш кереп,
Көрәшкә сыҡҡан — батырмы?
Икәүҙән-икәү алышып,
Ҡорҙашын йыҡҡан — батырмы?
Халҡына йәне ҡушылған,
Дошмандан илен ҡурсыған,
Эйәрләп атҡа атланған,
Ажғырып яуға ташланған, —
Илдең батыры шул булыр,
Илдең күрке шул булыр.

Атҡа менегеҙ, ирҙәр, ағалар,
Асылһын әйҙә иҫке яралар!
Яраларҙы ирек уңалтыр,
Яуыз дошман башын юғалтыр!
Ҡурҡмаҫ булһа ирҙәр яранан,
Уҡ та үтмәҫ беҙҙең аранан!

Батырмын, тип кем әйтмәй, —
Яу килгәндә йүне юҡ;
Сәсәнмен, тип кем әйтмәй, —

Дау килгәндә өнө юҡ,
Һайлап алған һылыуыңдың
Ҡанлы йәшен түктермәй,
Һөтөн имгән әсәйеңдең
Ҡайғынан билен бөктөрмәй,
Тотҡон ҡоштай башҡортҡа
Әҙер ирек бармы ни?!
Ялт-йолт иткән ябалаҡ
Яҙмышта кемгә юлдаш булмаған?
Бүтәгә үлән, буҙ ялан
Кемгә түшәк булмаған?
Яғаһына ҡош оялап,
Яңағына себен-серәкәй балалап,
Ир-егеттең башы ҡайҙа ятып
ҡалмаған?
Йөк күтәреп бил бөктөрмәй,
Хахылдап ҡан төкөрмәй,
Иҙел кисмәй, ут үтмәй,
Хәләл ҡаныңды түкмәй, —
Башҡортҡа тиң ирек бармы ни?
Күк ыласындың балаһы
Бауҙа үлә талпынып,
Яҡшы атаның балаһы
Шәһит үлә яу йөрөп.
Ҡарсыға үтмәҫ урмандан
Ыласын үтә таң менән.
Михнәт менән көн күргәнсе,
Яуҙа үләйек дан менән!

Ҡулыма алган был күмер —
Йортобоҙҙан ҡалған күмер ул;
Утҡа ташланған сабый балалай,
Һулҡылдап янған күмер ул,
Ҡулымды көйҙөргән шул күмер
Эшебеҙгә ғеуаһ булһынсы, —
Күмергә әйләнгән күк үлән
Юлыбыҙға түшәк булһынсы, —
Бөркөттәй күктә осорға,
Балыҡтай һыуҙа йөҙөргә,
Боландай ҡырҙа елергә —
Теләгебеҙ шул булһынсы!
Бүгәсәүгә ҡушылып,
Ир-батырға ҡуш булып,
Казактарға иш булып,
Шул теләкте яулайыҡ,
Шул иректе яулайыҡ!

* * *

Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылға,
Һинең бер ситеңдә ҡамыштар,
Йүгерекһең йылға, йорһоң йылға,
Икенсе ситеңдә бар таштар.
Ҡолаҡтарым менән телем ҡырҡып,
Танауымды йолҡоп алһындар.
Ҡырҡма башлы уҡ остары менән
Күҙҙәремде соҡоп алһындар.
Йүрүҙәнем, һинең исҡән елең
Танауһыҙ ҙа тәмле еҫ бирер,
Һинең һыуҙарыңдың шылтырауы
Ҡолаҡһыҙ ҙа миңә ишетелер.
Минең телем һине маҡтай алмаҫ,
Һәйөү йырын, моңон түгә алмаҫ,
Һүнгән күҙҙәр йәмде күрә алмаҫ,
Матурлығын хәтерем онота алмаҫ.

Бабайҙарға биргән яза кеүек,
Ҡабырғанан ырғаҡҡа аҫырҙар;
Ҡылыс менән башты сабып өҙөп,
Һөңгө остарына ҡаҙарҙар...
Һындырырҙар бороп аяҡ-ҡулды,
Йән ғазаплап серҙәр һорарҙар,
Һөйәктәрҙе йәнсеп төйҙә менән,
Бағанаға бәйләп борорҙар...

Ҡандарыбыҙ менән буялмайса,
Һинең һыуҙарыңды бирмәбеҙ.
Шул саҡта ла, Үҙән, тыуған йылға,
Тауҙарыңды һинең бирмәбеҙ.
Эйәрләгеҙ, ирҙәр, арғымаҡтар,
Эйәрләгеҙ быуаҙ бейәләр,
Йәлләмәгеҙ, һуңынан ҡолонларҙар,
Йәлләмәгеҙ, намыҫҡа эйәләр.

Әлмизәктәр һатың, ҡыҙҙар,
Һатың, кәрәк бары һуғышҡа.
Күтәрелең һуңғы ҡурҡынысһыҙ,
Ҡанлы, йәшле, ҡаты орошҡа...

* * *

Сәстәреңдең толом сулпылары
Сылтырауы салына үҙемә.
Күл буйында үҫкән ҡуға төҫлө
Тирбәлгәндәй күренә күҙемә.

Бешеп кенә килгән алмаларға
Алһыу һипкән тоҫлө йөҙҙәрең.
Алланыуы — әллә һылыу тәҫө,
Әллә асыу тотҡан уйҙарың.

Ҡуғалар ҙа аша күлгә төшкән
Ай нурындай күҙең тойолдо.
Ай битендә типкән миңдәр төҫлө
Әллә күңелең шуға уйылды.

Сал бөркәттәй булып Урал буйлап
Ат уйнатып килдем йыраҡтан.
Һиңә — бөркөт түгел, ай, Зөләйхам,
Ҡурҡыуыңды ташла йөрәктән.

Ҡырау төҫлө, күңелең сәскәләрен
Батыр даным, һылыуым, ҡыймаһын.
Әйтер һүҙең булһа, әйт үҙемә,
Үкенескә аҙаҡ ҡалмаһын.

Һандуғасты яҫҡыр ҡарсығаға
Килеүемде, һылыуым, оҡшатма.
Уҫал уйҙар менән килгәндер, тип,
Йөрәгемде, һылыуым, ҡаушатма.

Уралымда ҡыҙҙар күп булһа ла,
Йөрәгемдең сәбе — һин генә.
Мин дә һиңә шулай булам икән —
Ҡаф тау булыр тигеҙ юл ғына.

* * *

Ағиҙелкәй аға ҡая аралап,
Ул тирәлә һыуы һалҡындыр.
Уралымдан йыраҡ киткән һайын
Күңелемдә ут та ялҡындыр.

Уралҡайым, һайрар ҡошҡайҙарың
Тыңлаһам да, телен белмәйем.
Тәсбих әйтә микән үлгәндәргә,
Тип эсемдән генә уйлайым.

Туғайыңды сөм-сөм күлдәр уйған,
Ҡуға [1] менән керпек ҡыйылған.
Һыуҡайҙары күктән, әллә ерҙән,
Әллә күҙ йәшенән йыйылған.

Һаҙҙарында талдар бейек үҫмәй,
Күк ҡояшын ҡая ҡаплаймы?
Әллә үҙәгенә ысынлап та
Ҡара ҡандар ҡатып ҡалғанмы?

Һандуғасҡайҙарың ниңә һәр саҡ
Һаҙлыҡтарға ҡунып һайраусан?
Батыр ҡанын ҡойған яуыз фарман
Шунда килгәнме әллә Һарайҙан?

Ер тетрәтеп, үткер ҡылыс болған
Батырҙарың үткән юл ҡайҙа?
Әллә уларҙың да үткер ҡылысы
Һынды микән һуғышып был яуҙа?

* * *

Һауаларҙа осҡан, ай, ағылбай
Ҡыялап та оса, ҡош күрһә.
Яуҙарҙан да ҡалған батыр егет
Ҡыуана ла икән, төш күрһә.

Өйөрө генә йылҡы араһынан
Һөйөп менгән атым буртә ине.
Дошман яуҙарында сапҡан саҡта
Ҡайғыларым бары бөтә ине.

Ыласын да оса, күсте ҡыя,
Ҡанаттары талғас, бер төшә.
Ыласындай төҫлө батырҙар ҙа
Бер төшмәһә аттан бер төшә.

## *Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ,*
## *Батыр ирҙән тыуыр тағы ла*

1

Атайым да тиһәм, уғым аҙ,
Сабайым да тиһәм, алдым һаҙ.
Ян-яҡтарына ҡараны иһәм,
Йәп-юлдашҡайҙарым минең аҙ.

2

Өйөр генә йылҡы араһында
Һөйөп менгән атым бүртә ине,
Күҙ нурындай ҡыҙым, Миңлеязам,
Үкенескә икән, иркә ине.

3

Йүгереп тә йүгереп урттәр һалдым
Үҙән буйҙарына таратып.
Минән дә артыҡ Зөләйханы
Кемдәр һөйөр икән яратып?

4

Ҡая ташҡа ҡарап уҡ аттым,
Ылаҫып ҡына ҡошто ҡолаттым.
Таң алдынан һылыу Зөләйханы
Йоҡоһонан йырлап уяттым.

5

Юл буйында ятҡан бүҙәнәне
Сапмай киттем, үлгән турғай, тип
Зөләйханы үпмәй киткән булдым,
Әллә ниңә, юлым уңмай, тип.

6

Матур ғына ерҙең үҙәгенән
Шылтырап ҡына аға Үҙәнем.
Ҡытат күлдәк кейеп, ҡыя баҫып
Йөрөй микән минең гүзәлем.

7

Яна-яңғыҙ ғына ҡарсыға
Талпыналыр, бахыр, ҡош күреп.
Ике беләккәйен яҫтыҡ итеп,
Йоҡлай микән Зөләйхам төш күреп.

8

Һауаларҙа осҡан ағуна,
Ҡанаттары талып, ҡағына.
Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ,
Батыр ирҙәр тыуыр тағы ла.

9

Ҡайтыр инем тыуған илемә,
Ҡарҙар яуған минең юлыма.
Ҡарҙар яумаған, ай, юлыма,
Дусар булдым дошман ҡулына.

10

Иҫтәремдән сыҡмай Уралҡайым,
Шишмәләре, сәхрә, туғайы.
Йәннәт төҫөн биргән сәскәләре,
Һандуғастай моңло ҡурайы.

11

Эҫем буйҡайҙарында һары ҡамыш,
Екән дә генә башы бер ҡарыш.
Эҫем буйҡайҙарын баяр баҫты,
Йөрәккәйем шуға ла зар-һағыш.

12

Йәмле Әйҙең буйҙары,
Яуыз дошмандарҙың бутауы.
Алмаған да завод, ай, ҡалманы,
Ала алманым Оло Ҡыштауҙы.

13

Ҡаралай тауҙы үтәйек,
Ботаҡтары булһа, утайыҡ.
Ҡаршы ла килгән дошмандарҙы
Уңай сыҡҡан ерҙә бутайыҡ.

14

Әҙернә лә йәйә һөйәк баш,
Йәшел ебәк кәрәк керешкә.
Егет тә булһаң, тәүәккәл бул,
Тәүәккәллек кәрәк һәр эштә.

15

Ҡараңғылай төндә йөрөгәнемдә
Билдә сәнстем йөрөгән ерҙәргә.
Был донъяҡайҙарҙа ни табылмай
Тәүәккәл дә йөрөгән ирҙәргә.

16

Әйҙәнем дә, һай, әйҙәнем,
Әй буйына төшөп йәйләнем.
Ҡаршы ла килгән дошман яуын
Ҡуй һарығы кеүек әйҙәнем.

17

Әҙернә тарттым, уҡ аттым
Беләккәйемә таяныи.
Йәш баштарымдан яу яуланым,
Бүгәсәү ҡартҡа ышаныи.

18

Йүгереп кенә мендем, ай, тауҙарға
Аҡ кейеккәйҙәрҙе ауларға.
Ҡаршы ла килгән дошман яуын
Ҡуй һарығы кеүек яуларға.

19

Әй буйҡайыңда ҡуш тирәк,
Аҫыл ҡоштар ҡуна ояға.
Салауат китте, тип шатланмаң,
Минән дә батыр тыуыр донъяға.

# Ҡул ҡуйҙым: Полковник Салауат Юлай улы

## № 1

2 июль, 1772 йыл

**Салауат Юлаевтың Шайтан-Көҙөй волоСынан Өфө провинция канцелярияһына Ырысбай Шағанай улы тураһында ебәргән рапорты.**

### Рапорт — Өфө приказына

Өфө өйәҙе Себер юлы Шайтан-Көҙөй иләүенән старшиналыҡ эшен башҡарыусы Салауат Юлай улы кешелеклелек менән һеҙгә рапортымды белдерәм. Өфө приказына бынан түбәндәгеләр аңлашылыр.

Өфө өйәҙе Ҡазан юлының старшина Мөхәмәтрәхим Йосоп улы командаһынан указ менән беҙгә писарь булыусы Әбүбәкер Аҡман улының үҙ командабыҙҙағы Ырысбай

Шағанай улынан старшина Юлай Аҙналы улына Бикбау Чубан улы биргән ҡағыҙы хаҡында: «Һин, Ырыҫбай, ғәйепләнәһең, инде рәхимле батшаға тейешле пошлина бир, — тип, — Өфө приказына ебәрергә кәрәк буласаҡ», — тип һораны. Шул ваҡытта әлеге Ырыҫбай Шағанай улы писарь Әбүбәкер Аҡман улына әйтте: «Һин... [1] нигә кәрәк?» — тип. Писарь әйтте: «Рәхимле батшабыҙ ғәзими хәҙрәттәренең хазина дәфтәренә кәрәк», — тип. Әлеге Ырыҫбай йәнә ҡулы менән һүрәт ҡылып әйтте: «Батшабыҙға...» [2], — тип күрһәтте. Һәм мин, старшиналыҡ эшен башҡарыусы Салауат Юлай улы, шул һүҙҙе ишеткәс тә тотоп Өфө приказына ебәрергә, тип денщикка ҡушҡан инем, Мәсғүт Асҡар улы ярҙам итеп алып китте. Шул сәбәпле тотоп ебәреп булманы. Инде шул хәлде Өфө приказына мәғлүм ҡылам. Ул оло император ғәзими батшабыҙ хәҙрәттәренә ундай ауыр һүҙҙәр еткереүе сәбәпле, хәбәр итәм: әллә нindәй яуыз ниәттәре барҙыр, тип. Шул сәбәпле мин, старшиналыҡ эшен башҡарыусы Салауат Юлай улы, ҡулым ҡуйҙым. 1772 йылда маһир рабиғ [3] ахырының тәүге көнөндә. Писарь Әбүбәкер Аҡман улы ҡулым ҡуйҙым.



Салауаттың 1772 йылда Шайтан-Көҙөй волосы старшинаһы вазифаһын үтәгәндә Өфө провинция канцелярияһына ебәргән рапортының һуңғы бите.

*Боронғо акттарҙың Үҙәк дәүләт архивы*, ф. 7, һаҡлау берәмеге 2353, 11-се биттең ике яғы. Тәүге тапҡыр «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫылды — 2 ноябрь, 1978 йыл.*

Ошо рапорт Өфө приказына ебәрелде. Батша эше хаҡында. ... арҡылы».

## № 2

13 ғинуар, 1774 йыл

**Полковник Салауат Юлаевтың М. И. Поповты (Ивановты) Красноуфимск казак ғәскәрҙәренең атаманы һәм М. Д. Чигвинцевты есаул итеп билдәләү тураһындағы указы**

Бөтә Россия батшаһы, император ғәзими хәҙрәттәре һ. б., һ. б., һ. б., Петр Федорович хәҙрәттәренең указы буйынса.

Был [указ] император ғәзими хәҙрәттәре армияһының полковнигы Салауат Юлаев исеменән император ғәзими хәҙрәттәренә хеҙмәт итеүҙә тоғролоҡ күрһәткән, инде байтаҡ ваҡыт минең менән походта булып, минең тарафтан һәм император ғәзими хәҙрәттәренең бөтә армияһы тарафынан хеҙмәткә яҡшы ҡарай тип, өҫтәүенә рәхимле һәм камил [аҡыллы] тип табылған һәм һа-

---

* Артабан — ЦГАДА (Центральный Государственный архив древних актов) тип ҡыҫҡартып алына.

ман да минең янда булған, поптар нәселенән сыҡҡан Макар Ивановҡа ҡарата биреләде.

Быға тиклем Красноуфимск казактар командаһында есаул булып торған Овчинников һәм бүтән старшиналар өҫтөнән казактар тарафынан күп ялыуҙар килгәнгә күрә, мин ысын күңелдән хеҙмәт иткәнлеге раҫланған Ивановты Красноуфимск ҡалаһының бөтә халҡына атаман итеп билдәләүҙе кәрәкле тип табам, ә уға ярҙамға Матвей Чигвинцев бирелә.

Иванов менән Чигвинцев үҙҙәре [белеп], якшы тип табып ҡала буйынса билдәләп ҡуйған кешеләрҙе император ғәзими хәҙрәттәренең мәрхәмәте тарафынан ҡуйылған кешеләр кеүек күреп танырға, кәңәштәр бирергә һәм, үтә ауыр штрафҡа дусар булғығыҙ килмәһә, [уларҙы] бер һүҙһеҙ тыңларға һәм буйһонорға.

Шул уҡ ваҡытта һеҙгә лә, атаман Иванов менән есаул Чигвинцев, ҡабатлап әйтелә: бындағы халыҡ менән якшы мөғәмәлә итергә, һис ниндәй сәбәп менән бер кемде лә йәберләмәҫкә, ҡыйырһытмаҫҡа, һалым һалмаҫҡа, ришүәткә ҡағылмаҫҡа.

Әгәр ҙә көтмәгәндә берәй яктан император ғәзими хәҙрәттәренә ҡарата бола йә-

бүтән нәмә ишетһәң, мөмкин булғанса, һуңғы тамсы ҡанға тиклем көрәшеп, ҡаршы торорға. Ул турала һәм команданың хәле хаҡында миңә йыш ҡына рапорт бирергә. Үҙегеҙҙең тарафтан хаталыҡ йәки вайымһыҙлыҡ осрағында әлеге хәлдә һеҙ ҙә үлем язаһынан ҡотола алмаясаҡһығыҙ.

Был ҡаланы нисек тотоу тураһында күрһәтмә аҙаҡ, ваҡыты еткәс, бирелер. Шуға күрә һеҙгә, атаман Иванов менән есаул Чигвинцев, император ғәзими хәҙрәттәренең указы буйынса эшләргә.

Красноуфимскиҙа мең ете йөҙ етмеш дүртенсе йылдың ун өсөнсө ғинуарында бирелде.

Шуны раҫлау өсөн ҡул ҡуйҙылар:[1]

Полковник Салауат Юлай улы.
Есаул Әбдрәшит Чәкәй улы.
Һайлап ҡуйылған егәксе һәм тәржемәсе капрал Адил Бигашев.
Полктың поход писары Петр Лутохин.

*ЦГАДА, ф. 6, д. 427, 60-сы биттең ике яғы. — Төп нөсхә.*
*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» (М., 1975) тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 357.*

## № 3

14 гинуар, 1774 йыл

**Салауат Юлаевтың баш күтәреүсе Красноуфимск казактары атаманы М. И. Попов (Иванов) менән есаул М. Д. Чигвинцевҡа Красноуфимск крепосы менән идара итеү тураһында биргән күрһәтмәһе**

**Император ғәзнми хәҙрәттәре армияһы полковнигы Салауат Юлай улынан Красноуфимск ҡалаһында атаман итеп билдәләнгән Макар Иванов менән есаул Матвей Чигвинцевҡа түбәндәге пункттарҙан торған**

### Күрһәтмә

**1-се.** Мәғлүм булыуынса, һеҙ император ғәзими хәҙрәттәренең тулы хакимлығы менән Красноуфимск ҡалаһының бөтә кешеләре өҫтөнән ғәҙел хоҡуҡлы командирҙар итеп тәғәйенләнәһегеҙ; был хаҡта, тейешле тәртипте тотоу өсөн, указ бирелгән. Шуның өсөн һеҙгә ҡушыла — әгәр ниндәй ҙә булһа килеүсе йәки үтеп барыусы берәй кеше һеҙҙән юғары монарх әһеленә һәм граф гали йәнәптәренә [1] барырға һораһа,

ебәреү билетын уларға минән тыш бер ниндәй сәбәп менән дә бирмәҫкә. Ә минең тарафтан [билет] бирелгән һәм күрһәтмәләре булған кешеләрҙе инҡарһыҙ үткәрергә. Император ғәзими хәҙрәттәренә үҙ иректәре менән хеҙмәт итергә теләп килгән халыҡтарҙы ҡабул итеп, бындағы казактар исемлегенә теркәргә, күпме килгәнлектәре тураһында миңә йыш ҡына рапорт биреп торорға. Минең тарафтан ауырыу сәбәпле ҡалдырылған кешеләрҙе, әгәр улар ҡағыҙҙарын күрһәтһәләр, штрафтан ҡурҡһағыҙ, бер ниндәй сәбәп менән дә ауырлыҡҡа дусар итмәҫкә.

2-се. Кем император ғәзими хәҙрәттәренә хеҙмәт итергә теләй, уларҙы ҡарап, ҡоралдарының һәм һуғыш кәрәк-ярағтарының төҙөклөгөн тикшереп, билеттары менән туптура миңә ебәрергә.

3-сө Тейешле тоҙҙо һәм винаны һатыуҙан килгән аҡсаны яҡшылап һаҡларға һәм шул уҡ кенәгәләргә яҙып ҡуйырға. Ә ул тоҙҙо һатыусыларға элек билдәләнгән бишәр тин эш хаҡын һәм айына иллешәр тин фатир хаҡын тотҡарлыҡһыҙ биреп, ҡултамғалары менән кенәгәгә дөрөҫ итеп яҙып ҡуйырға. Ә вино йыйыусыға, әгәр элек йыйылмаһа, килешелгән кондиция бу-

йынса расписка менән бирергә. Һәм быларҙың бөтәһенә күҙ-ҡолаҡ булырға.

4-се. Тағы бер әмәл таптым: Красноуфимскиҙың элекке воеводаһы Никифор Бахматовты, вахмистры Савиновты, писары Михаил Мальцевты һәм бөтә граждандарҙы бер ниндәй сәбәп менән дә император ғәзими хәҙрәттәре һәм граф ғали йәнәптәре янына ебәрмәҫкә. Әгәр ҙә ирҙәр йәки ҡатындар араһынан берәйһе минең рөхсәттән тыш сыға ҡалһа, уны ҡаты ҡарауыл аҫтында тоторға. Ә воевода Бахматовты һәм уның яҡындарын сығарыу тураһындағы юл таныҡлығын шунда уҡ алып, миңә ебәрергә. Әгәр ул ҡаршылаша ҡалһа, конвой аҫтында миңә оҙатырға. Унан һуң үлем язаһы менән янап киҫәтәм: минең ихтыярҙан тыш бер кешене лә үткәрмәҫкә.

Шуларҙы аңлатып, ҡултамғамды һалам — император ғәзими хәҙрәттәре ғәскәренең тоғро полковнигы Салауат Юлай улы.

Әгәр воевода Бахматов әфәнде, комиссар Попов, вахмистр Савинов, писарь Мальцев аҙаҡ китергә теләһәләр, мине әйберҙәре менән көтһөндәр. Ә инде уларҙың һәммәһе йәки береһе юлға сыға ҡалһа, хәҙер үк кире бороғоҙ.

Полковник Салауат Юлай улы[2].
Һайлап ҡуйылған етәксе, тәржемәсе Адил Бигашев. Полктың поход писары Петр Лутохин.

*ЦГАДА, ф. 6, д. 439, 140—141-се биттәр. — Төп нөсхә.*
*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 359.*

## № 4

14 ғинуар, 1774 йыл

**Полковник Салауат Юлаевтың атаман М. И. Попов (Иванов) менән есаул М. Д. Чигвинцевҡа есаул Г. А. Овчинниковты хеҙмәттән ебәреү тураһындағы указы**

**Император ғәзими хәҙрәттәренә ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙе баҫтырыу өсөн ебәрелгән армияның поход полковнигы Салауат Юлай улы тарафынан Красноуфимск казак армияһы атаманы Макар Попов менән Матвей Чигвинцевҡа бирелгән Бөтә Россия батшаһы император ғәзими хәҙрәттәре**

## Указы

Ғинуарҙың 13-дә биргән доношениеһы менән Красноуфимск казак ғәскәрҙәре есаулы Григорий Овчинников хәрби хеҙмәттән ебәреүҙе һорап, император ғәзими хәҙрәттәренә хеҙмәткә 1736 йылдан билдәләнеүен һәм ошоға тиклем казак командаһында төрлө старшиналыҡ вазифаһында тоғро хеҙмәт итеүен белдерҙе, ә хәҙер шул казак командаһы унан ризаһыҙлыҡ белдерә, өҫтәүенә уға инде 58 йәш, ҡайһы бер ауырыуҙары ла бар. Минең ҡарауымса, ул, есаул Овчинников, император ғәзими хәҙрәттәренә артабан хеҙмәт итеүгә яраҡһыҙ булып сыҡты.

Шунең өсөн, император ғәзими хәҙрәттәренең указы һәм минең билдәләүем буйынса, хәбәр ителгән хәлдәр арҡаһында шул есаул Овчинниковты хәрби хеҙмәттән алырға, [был турала] белдереү һәм еренә еткереп үтәү өсөн император ғәзими хәҙрәттәренең указын һеҙгә, атаман Попов менән есаул Чигвинцевҡа, ебәрергә ҡушылды. Һәм тағы ла уны хеҙмәттән азат ителеүселәр командаһында тоторға кәрәклеге билдәләнә. Атаман Поповҡа ла, есаул Чигвинцевҡа ла император ғәзими хәҙрәттәренең ошо

указы буйынса эшләргә.

1774 йыл, ғинуарҙың 14-се көнө

Полковник Салауат Юлай улы [1].

Һайлап ҡуйылған капрал Адил Бигашев.

Полктың поход писары Петр Лутохин.

*ЦГАДА, ф. 6, д. 427, 57—58-се биттәр. — Төп нөсхә.*
*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 360.*

## № 5

14 ғинуар, 1774 йыл

**Салауат Юлаевтың сотник Денис Ершовты хәрби хеҙмәттән ебәреү тураһындағы резолюцияһы [1]**

Сотник Денис Ершов яҙған ошо доношение буйынса, унын аяк-ҡулында ғына түгел, бөтә тәнендә яралар булғанға һәм шул арҡала император ғәзими хәҙрәттәренә хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылғанға күрә, Ершовты бөтә хеҙмәттән азат итергә һәм ҡала эсендә ҡарауылға ҡуймаҫҡа. Шуны раҫ-

лап, армиянан полковник Салауат Юлай улы, һайланып ҡуйылған капрал Адил Биғаш улы [2], полктың поход писары Петр Лутохин ҡул ҡуйҙылар.

*ЦГАДА, ф. 6, д. 427, 55—56-сы биттәр. — Төп нөсхә.*
*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 361.*

## № 6

19 ғинуар, 1774 йыл

**Полковниктар Салауат Юлаев, Ҡәнзәфәр Усаев, атаман М. И. Попов (Иванов) һәм башҡаларҙың Көнгөрҙө Е. И. Пугачев ғәскәрҙәренә үҙ ихтыярҙары менән бирергә кәрәклеге тураһында ҡала халҡына өгөтнамәһе**

**Бөтә Рәсәй батшаһы император Петр Федорович ғәзими хәҙрәттәре армияһы менән килгән ғәскәр башлыҡтарынан — полковниктарҙан, старшиналарҙан һәм шул уҡ Рәсәй ғәскәрҙәренең атамандарынан, есаулдарынан, һайлап ҡуйылған етәкселәренән һәм уларҙың яҡындарынан Көнгөр ҡалаһының бөтә изге ниәтле кешеләренә һәм**

**Ватан императоры ғәзими хәҙрәттәренең тулы хакимлығына ҡан ҡойоуһыҙ һәм туҙҙырылыуһыҙ, ант менән бирелергә теләүсе төрлө ҡатлам обывателдәренә [түбәндәге] пункттарҙан торған.**

**Өгөтнамә**

**1-се.** Һис ниндәй икеләнеүһеҙ император ғәзими хәҙрәттәре яғына сығып, тоғролоҡ ҡылып, оло теләк һәм ихласлыҡ менән хеҙмәт иткән бөтә граждандарға уның беҙгә күренмәгән-беленмәгән тәҡдир һәм алла мәрхәмәте, ватанға тоғроларҙың ялбарып теләүҙәре арҡаһында бәхетһеҙҙәр араһынан сығып, Бөтә Рәсәй императоры тәхетенә ултырыуы һәм, ҡаршы тороуҙарға ҡарамай, империяның байтаҡ өлөшөн алырға өлгөрөүе, үҙенең ерендә казактарҙы хеҙмәткә һайлап ҡуйыуға ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙән башҡа бер кемгә лә һис ниндәй туҙҙырыу ҡылмай, [үҙ] биләмәләрендә ни эшләһә, шуға ихтыяр ҡуйырға бойороуы яҡшы мәғлүм.

**2-се.** Тәүҙә император ғәзими хәҙрәттәре һәм Дон казактары ғәскәренең төп етәксеһе оло граф ғали йәнәптәре Иван Никифорович Чернышев әфәнде[1] ихтыярына

буйһонмайынса, бер аҙ ҡаршылыҡ күрһәткән Өфө ҡалаһы хәҙерге көндә, мәғлүм булыуынса, баҫып алынған[2] һәм ғәйепһеҙҙәргә бер ни ҙә ҡылынмаған, ә ҡаршылыҡ күрһәтеүселәр үлемгә дусар ителгән.

3-сө. Красноуфимск ҡалаһы ҡайһылай дөрөҫ һәм лайыҡлы эш ҡылды һәм император ғәзими хәҙрәттәренең таныуы буйынса уға тоғро хеҙмәт итергә теләк белдерҙе; иң тәүҙә, ғәзими хәҙрәттәре армияһының килеүен ишетеп, һөйләшеү өсөн һәм ғәзими хәҙрәттәренең манифесы менән танышыу өсөн командир Бахматов, ҡурҡмайынса, канцелярист Петр Лутохинды ебәрҙе, ә ул, эштең асылын белгәс, Красноуфимск ҡалаһына тәүҙән үк дөрөҫ мәғлүмәт ҡылды. Ысынлап та [Петр Федорович] батша икәнен белгәс, бөтә граждандар оло тамаша яһап, килеүсе бөтә армияны ҡаршы алдылар һәм, үҙҙәре теләп, казактарҙың бөтә артиллерияһы менән утлы ҡоралдарын алдан уҡ ебәрҙеләр, осрашҡанда байраҡтар ҡаҙап, ҡалаға ингәндә император ғәзими хәҙрәттәре хөрмәтенә пушкаларҙан аттылар, һуңынан, ҡурҡыныс янай ҡалһа тип, байтаҡ дары, хеҙмәткә ышаныслы ике йөҙләп казак алып, Көнгөр ҡалаһына киттеләр. Бүтән урындар ҙа, йәғни: заводтар,

ҙур һәм бәләкәй ауылдар, Себер губернаһының крепостары — һәммәһе лә алынды һәм уларға артиллерия бирелде, казактар [һайлап] ҡуйылды.

Шулай итеп, хәҙер ғәзими хәҙрәттәренең армияһы ун биш меңдән ашыу. Иҫке Бисҭә [3] ауылында һәм бүтән ҡайһы бер урындарҙа беҙ, бигерәк тә — Усть-Кишерт ауылына ебәрелгән ғәскәребеҙгә ҡаршы командир Дмитрий Попов һәм сауҙагәр Емельян Хлебников кеүек төп боласыларҙың ҡаршылығына юлыҡтыҡ. Күптәрҙең яраланыуы, әсирлеккә алыныуы һәм [аҙаҡ] ғәйепһеҙ үлеүе, уларҙан башҡа ла үлтерелеүселәрҙең барлығы инде етмәйме ни?! Ошо ҡаршылыҡ күрһәтеү түгелме ни, бөтәһен дә күреп тороусы [аллаһы тәғәлә] алдында шул ғәйепһеҙҙәр өсөн яуап бирмәйһегеҙме ни?

4-се. Беҙ һеҙҙе дәррәү өгөтләйбеҙ һәм шуға өҫтәп император ғәзими хәҙрәттәре манифесының дөрөҫ нөсхәһен танытма менән сапҡынсы артынан ебәрәбеҙ. Үҙегеҙҙе йәлләһәгеҙ, ҡаршы килгән көслө армиянан туҙҙыртмағыҙ, ғәйепһеҙҙәрҙе ахыр сиккәсә болдөртмәгеҙ, ҡан ҡойошҡа дусар итмәгеҙ. Әгәр [беҙҙең яҡҡа] сыҡһағыҙ, тоғролоҡ ҡылып, беҙҙең һәм үҙегеҙҙең илсегә алдан хәбәр менән [кеше] ебәрегеҙ; унан һуң артил-

лерийны тотош: пушкаларҙы, дарыны, ваҡ ҡоралдарҙы һәм байраҡты ялғанһыҙ, бер аҙ халыҡ менән [берегеҙ].

5-се. Әгәр ошонан башҡа тағы берәй ҡаршылыҡ күрһәтһәгеҙ, ул саҡта император ғәзими хәҙрәттәренең хакимлығынан һәм ихтыярынан ҡотола алмаҫһығыҙ, беҙҙең армиянан тотош еңелерһегеҙ. Шуға күрә үҙегеҙҙең ҡарамағығыҙға тапшырабыҙ. Өҫтәүенә, әсирлеккә алынғандарҙың бөтәһен дә артабан төрмәләрҙән беҙгә ебәрергә ҡушабыҙ. Ошо өгөтнамә менән Красноуфимск казактарының капралы Иван Дружинин иптәштәре менән ебәрелә.

Шуны раҫлап, ҡул ҡуйҙылар: баш полковник Салауат Юлай улы, Ҡәнзәфәр Усәйен улы һәм башҡа старшиналар [4].

Старшиналар: Илсеғол Итҡолов тамғаһын һалды. Сөләймән Күсәкәев. Ҡәнзәфәр Усаев.

Һайлап ҡуйылған тәржемәсе һәм етәксе Адил Бигаш улы.

Полктың поход писары Петр Лутохин. Атаман Макар Попов.

1774 йыл, ғинуарҙың 19-сы көнө

Ротаның поход писары Василий Протопопов.

Сотник Имәт Мәмәтов тамғаһын һалды.

Сотник Имин Алаусейнов тамғаһын һалды.

*Үҙәк Дәүләт хәрби тарих архивы, ф. 20, д. 1235, 262—263-сө биттәр. — Төп нөсхә.*
*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 362.*

№ 7

19 ғинуар, 1774 йыл

**Полковниктар Салауат Юлаев менән Ҡәнзәфәр Усаевтың пушкалар һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары алыуҙары тураһында Югов заводы контораһына биргән билеты**

**Император ғәзими хәҙрәттәре армияһы менән килеүсе баш полковник Салауат Юлай улы менән поход полковнигы Ҡәнзәфәр Усәй улының Югов заводы контораһы директоры Иван Осокинға**

**Билеты**

Ғинуарҙың 19-сы көнөндә шул заводтан Трофим Ситников аша ике пушка, ҡырҡ йәҙрә һәм ҡырҡ ете картечь ебәрелгән ине, [улар] бында алынды, шул хаҡта ошо [билет аша] завод конторaһына хәбәр итәбеҙ

һәм белдерәбеҙ. Шуны раҫлап, ҡулыбыҙҙы ҡуябыҙ.

1774 йыл, ғинуарҙың 19-сы көнө

Баш полковник Салауат Юлай улы[1].

Поход полковнигы Ҡәнзәфәр Усәй улы.

Етәксе Адил Бигашев.

Полктың поход писаре Петр Лутохин.

*ЦГАДА, ф. 6, д. 416, 1 киҫәк, 355-се бит. — Төп нөсхә.*
*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 363.*

## № 8

20 ғинуар, 1774 йыл

### Атаман И. С. Кузнецовтың, полковник Салауат Юлаевтың һәм атаман М. Е. Мальцевтың ҡамалған Көнгөр хакимдарына, руханиҙарына һәм халҡына өгөтнамәһе

**Император ғәзими хәҙрәттәре армияһына Рәсәй һәм Азияның төрлө халыҡтарын сыуалыштан һәм ғәйепһеҙгә таланыуҙан өгөтләү ниәте менән килгән Рәсәй ғәскәрҙәре-**


DE PIERRE III. 2[illegible]

Les dangers augmentèrent bien plus encore, lorsqu'on vit lever l'étendard de la révolte dans tout le pays des Baskires, peuple belliqueux de la nation des Tartares, qui habite dans le gouvernement d'Orenbourg, particulièrement dans les provinces d'Iset et d'Ufa, et qui, en 1770, étoit composé de vingt-sept mille familles. Julamanka, Karaänbika et Salavatka, leurs trois chefs suprêmes, reconnurent pour empereur le prétendu Pierre III, lui prêtèrent serment de fidélité avec toute leur nation, et travaillèrent avec la plus grande ardeur à lever des troupes, pour augmenter son armée. Un nommé Beloborodof, caporal d'artillerie, suivit leur exemple, et fut nommé attaman à Glaukoji.

Alors Pugatschef se vit en état de mettre son armée sur un pied militaire régulier. Il donna le titre de comte de Tschernitschef au cosaque Tschika, dont nous avons déjà parlé, et qui étoit après lui, le premier homme de son armée, et le nomma feld-maréchal et commandant en chef d'une seconde armée qu'il venoit de former. Revêtu de cette dignité et décoré de ces grades, il l'envoya avec quelques mille hommes, dans la province d'Ufa, où, comme nous l'avons dit, les

*Tome II.* T

1799 йылда Парижда француз телендә сыҡҡан китапта Салауат Юлаев тураһында яҙылған биттәрҙең береһе.

**неӊ баш етәксеһе Иван Степан улы Кузнецовтыӊ Көнгәр ҡалаһыныӊ баш командующий әфәнделәренә һәм шул ҡаланы һаҡлаусыларға түбәндәге пункттарҙан торған**

## Өгөтнамәһе

1. Бынан алда ла һеҙгә Азия халыҡтарыныӊ командующийҙары тарафынан өгөтнамәләр ебәрелгәндер, тип ышанам. Беҙҙеӊ император ғәзими хәҙрәттәре батша Петр Федорович Өсөнсөнөӊ хәҙер мәғлүм булып, үҙенеӊ ватаны, тулы монарх хакимлығы өсөн император тәхетенә ултырыуына инде бөтә Рәсәй халыҡтары шикләнмәгәндә, ғәзими хәҙрәттәренеӊ йөҙөн беҙ үҙ күҙҙәребеҙ менән байтаҡ күреп, уны танып, тоғролоҡ менән хеҙмәт итеп йөрөгәндә, нисек һеҙҙеӊ бөтәгеҙгә лә һаман шулай икеләнмәк кәрәк? [Ул] хәҙер тоғролоҡ ҡылған күп ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы алды, еӊел казак ғәскәрҙәрен һанһыҙ күп туплап өлгөрҙө, уларҙы артиллерия менән тәьмин итеп, ҡаршылыҡ күрһәтеүселәргә ҡаршы илдеӊ бөтә [тарафына] ебәрҙе; тоғролоҡ ҡылыусыларҙыӊ һәммәһенә лә ҡалаларҙы алған саҡта ғәзими хәҙрәттәренеӊ тулы хакимлығы яғына күсеүселәргә армия тарафынан бер

ниндәй ҡыйырһытыу, талау, йәбер, һалым һәм ғәйепһеҙгә ҡан ҡойоу ҡылмаҫҡа тип киҫәтте. Ә кемдең шундай мөғәмәләһе йәки яман вәхшилеге килеп сыкһа, [ул] ғәзими хәҙрәттәренең тулы хакимлығы буйынса үлем язаһынан ҡотола алмаясаҡ, бындай хәлдәргә минең тарафтан бөтә армия ҡаты киҫәтелде. Рустар ҙа, бүтән дин кешеләре лә тигеҙлеккә килтерелде: ҡылынған енәйәттәрҙә ғәйепле тип табылһалар, бөтә ҡаты сараларҙы күрергә.

2. Мин Иҫке Биҫтә ауылы эргәһендәге юлдарҙа торған ғәскәрҙәрҙе етерлек ҡарап йөрөнөм һәм Азия халыҡтарының, ғәзими хәҙрәттәренең ихтыярынан тыш, һис ниндәй өгөтнамәһеҙ ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙе генә түгел, тоғролоҡ һаҡлаусыларҙы ла нисек ҡыҫыуҙарын һәм төрлөсә йәберләүҙәрен күрҙем, шуға күрә һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә ул халыҡ, мәғлүм булыуынса, бик яҡшы уйҙа тора тип ышандырам, [улар] беҙгә лә бер аҙ баш-баштаҡлыҡ күрһәткәйне; ә хәҙер, юғарыла аңлатылыуынса, баҫылдылар һәм инде әүәл бөтәһен дә күреп тороусы [аллаһы тәғәләгә], унан һуң император ғәзими хәҙрәттәренә һәм уның көслө армияһына ҡарата тыныслыҡ ҡылыуын туҡтаттылар, тип өмөтләнәм.

3. Миңә һеҙҙең ҡаланы һаҡлаусылар — подполковник Башмаков, президент Хлебников, уның улы Емельян Хлебников тарафынан ғәзими хәҙрәттәре ихтыярына ҡаршылыҡ күрһәтелеүе тураһында ла хәбәр иттеләр. Ғәйепһеҙ һәм законды төшөнөп етмәгән халыкты ҡуҙғатып, уларҙы йыйып, төрлөсә өгөтләп, ватанға һәм ғәзими хәҙрәттәренең ихтыярына ҡаршы күп ҡаршылыҡ һәм тупаҫлыҡ ҡылалар. Һеҙҙә йәлләү тойғоһо бармы, йә иһә көтөүсеһеҙ һарыҡ кеүек ҡот осҡос ҡан ҡойошҡа дусар ителгәндәрҙең алдағы хөкөмөнән ҡурҡа беләһегеҙме? Һеҙ ошо өгөтнамәне аңлай алаһығыҙмы?

4. Мин йөрөгән арала христиандар араһынан грек диненә табыныусыларға һәм суҡына башлаусыларға ҡаршылыҡ күрһәтеүселәр табылды, һәм [улар] сиктән сығып, мосолмандарҙың өгөтнамәһе буйынса уларҙың законына ҡыҫылғандар, ә сиркәү әһелдәре, ҡурҡыштарынан, аллаға рәхмәт ҡылыуҙы, табынып йырлауҙы ҡалдырып торғандар. Мин был әҙәпһеҙлекте беҙҙән юғарылағы аллаға ҡаршылыҡ күрһәтеү тип таптым һәм шул минуттан башлап христиан законы буйынса ҡурҡмайынса көн һайын ғибәҙәт ҡылырға, император ғәзими хәҙрәт-

тәре һәм уның армияһы хөрмәтенә табынып йырларға, ә дindән айырылғандарҙың ғәйептәрен асыҡлап, штраф һалырға ҡуштым.

**5.** Был өгөтнамәлә яҙылғандарға ҡарата мин ысын күңелдән, христиан дәрәжәһе менән белдерәм: ысынлап та беҙҙең император Петр Федорович Өсөнсө икәнлегенә ышанығыҙ, рәхимле һәм саф күңелле христиандар! Мин күп нәмәне аңлатыр инем, ләкин күрәһегеҙ, оло ғәскәрҙең төрлө һорауҙары бар, оҙон өгөтнамә яҙып ултырырға [ваҡыт] етмәй, ә хәрби коллегияның манифесы менән указының күсермәләрен ошоноң менән бергә ебәрәм.

**6.** Һеҙгә тағы шуны иғлан итергә теләйем. Һеҙ бөтәгеҙ ҙә законды беләһегеҙ. Беҙҙең тәүге император һәм бөтә монархтар, йәғни, бүтәнсә әйткәндә, һәр бер дәүләт ошондай болаларҙа бер-береһенә илселәр ебәрә. Һәр бер хаким йәки ҡала уларҙы ҡулға алырға тейеш түгелдер, тип уйлайым. Мин дә һеҙҙән ебәрелгәндәрҙе һис тә ҡулға алып, яза аҫтында торорға теләмәйем, ә хәбәрҙәрен алғас, намыҫлыҡ менән үҙҙәренең йорттарына [1] ҡайтарып ебәрәм. Ә бына Көнгөр ҡалаһында ҡаршылыҡ күрһәтмәйҙәрме ни? Меҫкен илселәрҙе ябай халыҡ

ҡына түгел, священник дәрәжәләр ҙә, элəктереп алып, төрмәгә ултыртып интектерә. Ысын күңелдән һорайым, улай эшләмәгеҙ һәм үҙегеҙҙе һәләкәткә дусар итмәгеҙ!

7. Тоғролоҡ ҡылып [беҙҙең яҡҡа] сығырға теләүсегеҙҙе һуңғы тапҡыр үҙегеҙҙең ҡарамағығыҙға тапшырам. Һәм ышанығыҙ, һеҙ император ғәзими хәҙрәттәре армияһы тарафынан һис тә туҙҙырылмаясаҡһығыҙ. Хатта элек уҫаллыҡ ҡылыусылар ҙа ғәзими хәҙрәттәренең указы менән үлем язаһынан ҡотҡарыласаҡ. Шуға күрә, ҡурҡмайынса, ҡаланың иң эре хужалыҡтарынан унлап кешене һөйләшеү өсөн ошо аңлатма менән миңә ебәрегеҙ.

8. Әгәр һеҙ әсирҙәрҙе миңә ебәрмәһәгеҙ һәм үҙегеҙ ҙә бирелмәһәгеҙ, ышандырып әйтәм, хәрби ҡул менән һөйләшергә тура киләсәк. Һеҙ ул хаҡта [еңел] уйламағыҙ — минең армиям ун биш мең [кеше] һәм снаряд запасы менән яҡшы артиллерия, өҫтәүенә, һеҙ буйһонмағанға күрә, император ғәзими хәҙрәттәренән армияға тағы егерме меңгәсә ярҙам талап итәсәкмен. Тик христиандарҙы йәлләгәнемә ышанығыҙ. Үҙегеҙҙе һәм ғәйепһеҙ ҡара [халыҡты] һәләк итмәгеҙ.

9. Аҙаҡ өҫтәп яҙам: ғәзими хәҙрәттәре-

неҙ ҡушыуы буйынса мин һеҙҙең менән бына ҡайһылай аталарса [хәстәрлекле] мөғәмәлә итәм. Әгәр һеҙ артиллерияны, ҡорал һәм һуғыш кәрәк-яраҡтарын йәки граждандарҙан иң күренеклеләрен миңә ебәрһәгеҙ, ышанығыҙ, мин, башҡорт командаһын ҡалдырып, һеҙҙең янға икеләнмәйенсә үҙем барам, ә һеҙ икеләнмәһен өсөн, бөтә ғәскәрҙе яҡын-тирәләге ауылдарҙа ҡалдырам. Ә беҙ ебәргән тоғролоҡло ылаусыларҙы шул уҡ сәғәттә ебәрегеҙ һәм миңә килергә ҡушығыҙ.

1774 йыл, ғинуарҙың 20-се көнө

Бөтә ғәскәрҙең баш етәксеһе Иван Кузнецов.

Баш полковник Салауат Юлай улы [2].

Ғәскәр етәксеһе һәм тәржемәсе Адил Бигашев.

Казактар атаманы Михаил Мальцев.

Полктың баш писары Петр Лутохин.

Рота писары Василий Протопопов.

*ЦГАДА, ф. 6, д. 512, II киҫәк, 4—6-сы биттәр. — Төп нөсхә.*

*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 364.*

## № 9

21 ғинуар, 1774 йыл

**Атаман И. С. Кузнецов менән полковник Салауат Юлаевтың Югов заводы атаманы Г. Т. Ситниковҡа отрядты яҡын-тирәләге ауылдарҙың кешеләре менән тулыландырыу һәм Көнгөрҙө ҡамарға әҙерләнеү тураһындағы күрһәтмәһе**

**Император ғәзими хәҙрәттәре армияһының Рәсәй һәм Азия ғәскәрҙәренә баш етәксе булып килгән Иван Кузнецовтың, полковник Салауат Юлай улының һәм уларҙың иптәштәренең Иван Осокин [ҡулындағы] Югов заводынан Россия казактар ғәскәрҙәренә казактар йыйыу өсөн тәғәйенләнгән атаман Гаврила Ситниковҡа түбәндәге пункттарҙан торған**

### Күрһәтмәһе

1. Һәммәгеҙгә лә мәғлүм булыуынса, барыһын күреп торған аллаһы тәғәлә мәрхәмәте менән һәм император ғәзими хәҙрәт-

тәренең бөтә ғәскәре ғибәҙәт ҡылғанға күрә батшабыҙ император Өсөнсө Петр Федорович хәҙрәттәре күренмәҫ ерҙән Бөтә Рәсәй һәм Ватан тәхетенә ултырҙы; уны ысын күңелдән танып, ғәзими хәҙрәттәренә тоғролоҡ йөҙөнән хеҙмәт итеү өсөн күп ҡалалар һәм ауылдар бирелде. Ә беҙ Көнгөр ҡалаһына килгәс, ундағы ҡайһы бер тоғролоҡһоҙ кешеләр һәм тирә-яктағы обывателдәр ғәзими хәҙрәттәренә хеҙмәт итергә [саҡырып] таратылған өгөтнамәгә оло ҡаршылыҡ күрһәтәләр, ғәзими хәҙрәттәренең тулы ихтыярына буйһонмайҙар, бигерәк тә Көнгөр ҡалаһы [тарафынан] һәм командаһы менән йөрөгән полковник Башмаков тарафынан сыуалыш ҡылына, уның ғәҙелһеҙ күңеле арҡаһында күп ҡан ҡойош һәм туҙҙырылыш менән ғәйепһеҙ халыҡ нахаҡҡа һәләк була. Шуға күрә, [ул] намыҫһыҙҙар яғынан тағы ла ғәйепһеҙ юғалтыуҙарға дусар ителмәһен өсөн һиңә, беҙҙең тарафтан атаман итеп тәғәйенләнеп ебәрелеүсегә, [шуларҙы] билдәләргә кәрәкле тип таптыҡ: мөмкин булғанса Көнгөр тирәһендәге ауылдарҙа ғәйепһеҙ халыҡҡа аңлатып, өгөтләп, император ғәзими хәҙрәттәре ғәскәренә тоғролоҡ ҡылған ышаныслы, яҡшы ҡоралы һәм һәйбәт атлы казактарҙы үҙеңдең

яғыңа алырға. Алып бөткәс, шул Көнгөр ҡалаһын тирә-яҡтан тотош ҡамап, император ғәзими хәҙрәттәре ихтыярына ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙе юҡ итергә тырышырға, ә бирелеүселәрҙе ҡаты ҡарауыл аҫтында тотоп, ул тоғролоҡлолар туҙҙырылмаһын өсөн, үлем язаһы янауында ныҡлы күҙәтергә.

2. Казактар ғәскәрен йыйыу тураһында — теүәл күпме йыйыла һәм Көнгөр ҡалаһы ҡайһы тирәнән ҡамала, дошмандың ниндәй көстәре ҡаршылыҡ күрһәтә — шуларҙың барыһы тураһында беҙгә тулы исемлек ебәрергә. Ә инде уҫал хөкөм ҡылынһа һәм ҡаршылыҡ күрһәтеүселәр менән һуғышыу осрағында, форсат тыуғас та, йыйылған ғәскәрең менән беҙҙең янға килергә.

3. Беҙ һиңә, Ситников, командаңа ярҙамсы итеп есаул Стифей Черепановты билдәләйбеҙ һәм үҙегеҙҙең ҡарамаҡҡа етерлек һанда сотниктар һәм капралдар һайларға [ҡушабыҙ], уларҙы кәрәк осраҡта үҙ командалары менән әҙер торорға тейешлектәре хаҡында ҡәтғи киҫәтергә. Һәм артабан, ҡурҡыныс тыуған хәлдә, бында дөрөҫ хәбәрҙәр ебәрергә.

4. Ошо командировкала булғанда һәм тоғролоҡло [кешеләрҙе] йыйғанда урында-

ғы казактарға, әгәр үлем язаһынан ҡурҡһағыҙ, бер ниндәй йәбер, һалым һәм ҡыйырһытыу ҡылмаҫҡа, аҙыҡ-түлектән башҡа ришүәткә ҡағылмаҫҡа.

5. Әгәр кем дә кем төрлө [дәрәжәләге] обывателдәрҙән мал йәки аҡса ҡаҙнаһы менән төрлө ылау тартып алһа, ғәйепләнене язалау ниәте менән император ғәзими хәҙрәттәренә оҙатыу өсөн, ул талаусыны беҙҙең янға ебәрергә. Әгәр һеҙ ошо тоғролоҡто һаҡлаһағыҙ, хеҙмәт тәртибе буйынса, ғәзими хәҙрәттәренең жалованиеһы менән бүләкләнеүҙән ҡоро ҡалмаҫһығыҙ. Киреһенсә, һеҙҙең тарафтан [ғәзими хәҙрәттәренең] ихтыярына ҡаршы уҫаллыҡ ҡылынһа, юғарыла әйтелгәнсә, һәр берегеҙ ҡаты үлем язаһына дусар ителер.

6. Һеҙгә тағы ла шуны белдерәбеҙ: нисек булһа ла һуңғы тамсы ҡанығыҙға тиклем тырышып, император ғәзими хәҙрәттәре ихтыярының дошмандарын, атап әйткәндә, подполковник Башмаковты иптәштәре һәм командаһы менән аяҡ-ҡулдарын тимер менән бығаулап беҙгә оҙатырға.

Шуларҙы раҫлап, ҡул ҡуябыҙ. Тейешле мәғлүмәт өсөн хәрби коллегияның манифесынан һәм указынан күсермәләр теркәлә.

Баш етәксе Иван Кузнецов.
Баш полковник Салауат Юлай улы [1].
Ғәскәри етәксе һәм тәржемәсе Адил Бигашев.
Армияның ғәскәри поход писары Петр Лутохин.
Ротаның поход писары Василий Протопопов.

1774 йыл, ғинуарҙың 21-се көнө

*ЦГАДА, ф. 6, д. 427, 52—53-сө биттәрҙең ике яғы. — Төп нөсхә.*
*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 365*

## № 10

22 ғинуар, 1774 йыл

**Атаман И. С. Кузнецов менән полковник Салауат Юлаевтың Красноуфимск тоҙ прилавкаһы һатыусыһы С. Антоновка Көнгөр янына тоҙ ебәреү тураһындағы бойороғо**

**Император ғәзими хәҙрәттәре армияһының баш етәксеһе Иван Кузнецовтың Красноуфимск тоҙ лареғы һатыусыһы Сергей Антоновка биргән**

Бойороғо

Ошо [бойороҡто] алғас, император ғәзими хәҙрәттәре армияһы өсөн егерме бот тоҙ ебәрергә, ә уны бында оҙатыу өсөн ундағы есаул Чигвинцевтан юлға бер ылау талап ит. Шуға күрә быны тотҡарлыҡһыҙ эшләргә. Унан тыш, бирелгән расписка буйынса казак Михаил Ражевтан бер бот тоҙ өсөн аҡса алма. Һатыусы Трифон Кисловтан вино алғас, ярты биҙрәһен казак Ефтефей Тележниковҡа бир, йәки бер биҙрә бир ҙә ҡуй.

1774 йыл, ғинуарҙың 22-се көнө

Етәксе Иван Кузнецов урынына уның приказы буйынса казактар ғәскәре атаманы Михаил Мальцев ҡулын ҡуйҙы.

Баш полковник Салауат Юлай улы [1].

Ғәскәрҙең поход писары Петр Лутохин.

*ЦГАДА, ф. 6, 416, 1 киҫәк, 28-се биттең ике яғы. — Төп нөсхә.*
*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 306.*

№ 11

26 ғинуар, 1774 йыл

**Атаман И. С. Кузнецов менән полков-**

**ник Салауат Юлаевтың Көнгөр ҡалаһына секунд-майор Д. О. Гагрин етәкселегендәге язалаусы команда килеү сәбәпле һаҡлыҡ саралары тураһында Оса земство йортона биргән ордеры**

**Император ғәзими хәҙрәттәре армияһының баш һәм поход етәксеһе Иван Кузнецов менән [полковник] Салауат Юлаевтың Оса земство йортона ордеры**

Ғинуарҙың 26-сы көнөндә Ҡазан ҡалаһынан Көнгөр ҡалаһына дүрт йөҙ кешенән [торған] гусарҙар партияһы пушкалар һәм башҡа һуғыш кәрәк-яраҡтары менән килде — алынды [1]. Һәм бында армияла һәм эреле-ваҡлы ауылдарҙа төрлө һаҡлыҡ саралары күрелде. Әгәр һеҙгә ниндәйҙер һөжүм ҡылынһа, ул саҡта беҙҙән армия һорарға.

1774 йыл, ғинуарҙың 26-сы көнө

Баш етәксе Иван Кузнецов.
Полковник Салауат Юлай улы [2].
Ғәскәри етәксе һәм тәржемәсе Адил Бигашев.
Ротаның поход писары Василий Протопопов.

*ЦГАДА, ф. 6, д. 416, 1 киҫәк, 251-се бит. — Төп нөсхә.*

*«Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» тигән китаптан башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 367.*

## № 12

23 март, 1774 йыл

**Полковник Салауат Юлаевтың сотник Илатбай Илембай улына отрядҡа кешеләр йыйыу тураһындағы приказы**

Ул оло император бадишаһымыҙ Петр Федорович хәҙрәттәренең указы ҡәүәтенсә тәхҡиҡ[1] бойоролалыр мин полковник Салауат старшина Юлай улынан. ... ...[2] сотник Илатбай Илембай улына, рәхимле бадишаһ хәҙрәттәренә ҡаршылыҡ ҡылыусы бурҙарға ҡаршы тороп, үҙ ҡул аҫтындағы командалары менән, йән-тән менән һуғыш итергә, тип, һәр өйҙән хеҙмәткә ярарҙайҙарын — аттарын һәм йәйәүлеләрен ҡалдырмайынса, ҡаршылыҡтарына ҡарамайынса, батша хеҙмәтенә сығарырға, тип. Әгәр ҙә хеҙмәткә ҡаршы булһалар, ундай кемһәнәләрҙе тотоп, рапортың менән беҙгә ебәрергә, тип һәм беҙ, түбәндә яҙылған команда халыҡтары сотник Илатбай Илембай

улын ысын тыңлап хеҙмәт итһендәр, бадишаһыбыҙ ағзәм[3] хәҙрәттәренең дә хөкөмөнән ҡурҡмаҡ өсөн, тип, полковник Салауат старшина Юлай улы ҡулым ҡуйҙым һәм инанмаҡлыҡ хаҡында мисәт баҫтым.

1774 йылда марттың 24 көнөндә

*ЦГАДА, ф. 6, д. 416 II киҫәк, 208-се бит. — Күсермә.*
*«Ағиҙел» журналының 1962 йылғы 8-се һанында баҫылған фотокопия буйынса төрки теленән башҡортсаға әйләндереп бирелә. (87-се бит, фотокопия № 1).*

## № 13

6 июнь, 1774 йыл

**Салауат Юлаевтың старшина Бүләк Яҡупов һәм башҡаларҙан рапорт алыуы һәм уларға артабан нисек хәрәкәт итергә кәрәклеге тураһында биргән әмере**

Һеҙгә рәхимле күңел менән хеҙмәт итеүсе старшина Бүләк Яҡуп улынан, йәнә атаман Ладин фәлән[1] улынан, йәнә старшина Арслан Ранғул улынан ебәрелгән рапортҡа мин, главный полковник Салауат Юлай улы, юлыҡтым Ғәбделкәрим Ғәйет улы аркылы,

Инде бынан түбән былдағы хәлдәрҙе хәбәр итәм.

Рәхимле бадишаһыбыҙ Петр Федорович хәҙрәттәре беҙҙең Әй буйына килде, туғыҙ мең кеше менән. Һәм мәҙкүр гусарҙар полкына юлығып [2], ике мәртәбә һуғыш иттек, бик [күп] [3] кешеләрен үлтереп. Бер аҙ кешеләре ҡасып ҡотолдо.

Инде унда ебәрелгән командирҙарҙың әмерен тыңлап, ғәйәт тә мәхкемлек [4] менән команда йыйып, килгән дошмандар менән ҡаршы тороу йәһәтен ҡылығыҙ, күңелегеҙҙе һис бер яҡҡа ауыштырмайынса, тип әмер итеүсе главный полковник Салауат Юлай улы.

1774 йылда саратаның [5] 14 көнөндә. Бынан унда барырға [форсат] булманы — Көнгоргә киттек. Һәм һеҙ бер аҙ командалар менән килеп, беҙгә юлығығыҙ. Ошо яҙыу менән барыусы Ғәбделкәрим Ғәйет улына ылауҙы бирегеҙ, юлдашы менән, туҡтауһыҙ һәм прогонһыҙ [6].

*ЦГАДА, разрлд 6, д. 146, II киҫәк, 19-сы бит. — Төп нөсхә.*
*«Ағиҙел» журналының 1962 йылғы 8-се һанында баҫылған фотокопия буйынса төрки теленән башҡортсаға әйләндереп бирелә (88-се бит, фотокопия № 2).*

## № 14

10 сентябрь, 1774 йыл

**Салауат менән Юлайҙың Ҡатау заводы эшселәренә мөрәжәғәте**

Беҙ, главный атаман Юлай Аҙналы улынан һәм бригадирлыҡ эшен башҡарыусы баш полковник Салауат Юлай улынан, һүҙ шулдыр:

Һеҙ, Ҡатау заводында командир булып тороусы приказчиктарға һәм ҡарттарға!

Әгәр һеҙҙең кешегеҙ беҙгә тотолһа, беҙ уларҙы үлтермәйенсә һәм зарар килтермәйенсә һеҙгә ҡайтарабыҙ. Әгәр беҙҙең кешебеҙ һеҙгә тотолһа, итәһегеҙ уны тотҡон һәм бәғзеләрен үлтерәһегеҙ, имеш. Беҙ, әгәр беҙҙең күңелебеҙҙә уҫаллыҡ булаһы булһа, алла теләһә, һеҙҙән артығыраҡ тотоп һәм һеҙҙән артығыраҡ үлтерер инек. Беҙ теләмәйбеҙ, күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡлыҡтан. Инде күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ. Әгәр татыулыҡты теләй торған булһағыҙ, ебәрегеҙ Мусабай Бикйән улын, аралыҡта йөрөп, татыулаштырыу өсөн. Һеҙҙең беҙгә тотолған ике урыҫтың береһен ҡайтарҙыҡ, яҙыу менән, һәм Мусабай ҡайтып килгәндән килин [1], бында беҙҙең ҡулыбыҙҙа ҡалған береүһен дә ҡайтарырбыҙ.

Беҙ бер-беребеҙ менән бәхәсләшеп, бер вә беребеҙҙе бөлдөрөшөп торорға мөмкин түгелдер: көллөбөҙ ҙә бадишаһыбыҙ император Петр Федорович хәҙрәттәренең ҡолобоҙ һәм беҙгә даим изге хәбәрҙәр килә указдар арҡыры: улы Павел Петровичк кушҡандыр, тип, һеҙ ҙә уларҙың сәләмәт леген теләгеҙ, тип. Изгелек теләүсе дуҫығыҙ баш атаман Юлай Аҙналы улы ҡулы ҡуйҙым һәм бригадирлыҡ эшен башҡарыусы баш полковник Салауат Юлай улы ҡулым ҡуйҙым.

1774-се маһ рәжәптең[2] 15 көнөндә

Войсковой писарь Ғәбдрәшит улы ҡулы ҡуйҙым.

*ЦГАДА, ф. 1100, р. 11; 212-се биттең ике яғы. Күсермә.*
*«Ағиҙел» журналының 1962 йылғы 8-се һанын баҫылған фотокопия буйынса төрки теленән башҡортсаға әйләндереп бирелә (89—90-сы бит фотокопия № 3,3 а).*

## № 15

7 май тирәһе, 1774 й

**Салауат Юлаевтың Шайтан-Көҙөй волосына иректәге туғандарына хакимдар**

**дында ғаилә мәнфәғәттәрен ҡайғыртыу тураһында һорап яҙған хаты**

Мәғлүм булһын: бөгөнгө көндә үҙ йорттарында йәшәүсе старшиналарҙан беҙҙең эштәр тураһында һорапһалар, беҙгә юҡ-бар яла яҡмаһындар, дөрөҫөн күрһәтһендәр; Пугачевтан беҙгә генә түгел, бөтә дүрт юлға ла приказ булды бит, беҙ заводтарҙы яндырыуҙы һәм көрәште шул приказ арҡаһында ҡылдыҡ. Ә бер рус менән бер сыуаш кешеһе аҫылһа, уларҙы атаман Белобородовтан [шундай] указ бар, тип, Ибрәш Ғалин тотоп алып килеп аҫты. Был ысынлап та дөрөҫ. Әйберҙәрен һәм бурыл атын алып, шуның менән йөрөнө, үҙегеҙ ҙә күрҙегеҙ бит.

Беҙҙән шикләнмәгеҙ. Беҙ хәҙерге көндә өйҙәрендә йәшәгән халыҡҡа бер ниндәй ҙә ғәйеп ташламаныҡ, ә уларҙың именлеген генә ҡайғырттыҡ. Шуға күрә улар ҙа беҙҙе изге доғаларынан ташламаһын ине. Әгәр беҙҙең өҫтән артыҡ юҡ-бар күрһәтһәләр, беҙ ҙә үҙебеҙ белгәнде һөйләрбеҙ һәм, шулай итеп, бер-беребеҙ ҡаршыһында яуаплашырбыҙ. Баш һалыусылар ҡотолдо, тип уйлай күрмәһендәр, сөнки уларҙың бөтә ҡылған эше беҙгә мәғлүм.

Ҡатындарыбыҙ һәм балаларыбыҙ хаҡында Ырымбурға хәбәр бирегеҙ; беҙҙе ҡәрҙәштәребеҙ ҡотортманы, шуға уларҙы азат итһендәр, тип яҙығыҙ. Әгәр быны губерна канцелярияһы эшләй алмай икән, Сенатҡа ебәрһен; гәзими хәҙрәттәренең ҡолдары уға буйһоноусылар ҡулы аҫтында хеҙмәтсе булмаһын. Балаларҙың йәшен күрһәтегеҙ.

Ғүмерҙәре юҡ ителеүселәрҙең (йәғни, аҫып йәки язалап үлтерелеүселәрҙең) ғаиләләрен тартып алырға тигән указ ысынлап юҡ. Беҙ, хоҙай ҡушһа, язаланмабыҙ тигән өмөттә торабыҙ, сөнки хәҙер үлем язаһы тыйылған. Әгәр һеҙ ошолар хаҡында ҡайғыртмаһағыҙ — кеше түгелһегеҙ: кешеләр аттар тураһында ла юллайҙар һәм хәстәрлек күрәләр.

Беҙҙең турала ла хәбәр бирегеҙ, Салауаттың ҡатынын һәм бер улын комендант ҡарауылы һаҡлай, тип яҙығыҙ. Резолюцияға тиклем уларҙы [комендант] һәләк итеп ҡуймаһын, тип ҡурҡабыҙ. Бер улымды секретарҙа фатирҙа тороусы генерал алған. Бүтән ҡатындар һәм балалар ҙур [түрәләр] тарафынан таратып алынған, һәм улар көн һайын бергә ашайҙар, йөрөйҙәр, ҡатындар һәм балалар алдында ҡыланалар. Күрһәтмәләрҙе дөрөҫ ҡарамаҫтар, тип уйлайбыҙ. Чу-

чаловтан күҙ йәштәре менән һорағыҙ — беҙҙе һәм беҙҙең эште губерна канцелярияһы ҡарамағына алһындар, мең һум кәрәк булһа ла — бурысҡа булһа ла алығыҙ, өҫтәүенә, мишәрҙән аҡсалы һандыҡ алынған, тип ишеттем, [шуның] табылыуы ихтимал.

Был хатта яҙылғандарҙы [үтәргә] тырышығыҙ, һәм беҙҙән һуң ҡалып йәшәгәндә йорттарығыҙҙа тороғоҙ һәм мөлкәт йыйнағыҙ.

Тәржемәсе Андрей Васильев тәржемә итте.

*ЦГАДА, ф. 6, д. 593, 317-се биттең икенсе яғы. — Төркисәнән тәржемә.*
*«Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии» тигән документтар йыйынтығынан (Өфө, 1975) башҡортсаға тәржемә итеп алынды, док. № 202.*

# Аңлатмалар

## ШИҒЫРҘАР

Уралым. Ошо һәм артабанғы алты шиғырҙы матбуғатҡа тәү башлап XIX быуатта яҙыусы Ф. Д. Нефедов менән крайҙы өйрәнеүсе Р. Г. Игнатьев рус телендә сығара. Беренсе дүрт шиғырҙың сәсмә тексы 1880 йылда «Русское богатство» журналының 10-сы һанында Ф. Д. Нефедовтың «Движение среди башкир перед Пугачевским бунтом; Салават, башкирский батыр» тигән мәҡәләһе эсендә баҫыла. 1893 йылда тәүге ете шиғырҙың тулыраҡ вариантын Р. Г. Игнатьев үҙенең «Салават Юлаев — пугачевский бригадир, певец и импровизатор» исемле мәҡәләһе менән бергә «Казан университеты эргәһендәге археология, тарих һәм этнография йәмғиәте хәбәрҙәре»ндә бирә (XI т., 2-се сығарылыш, 161—166-сы биттәр). Шулар араһынан бер текст хәҙерге көндә «Һандуғас» һәм «Тирмәмдә» тип исемләп, икегә бүлеп йөрөтөлгән шиғыр) 1914 йылда «Россия. Полное географическое описание нашего отечества» тигән хеҙмәттә

баҫыла. Р. Г. Игнатьевтың алда өйтелгән мәҡәләһе ошо ете шиғыр менән бергә 1894 йылда Ҡазанда айырым китап булып сыға, ә Октябрь революцияһынан һуң «Башҡортостан шуралар йөмһүриәтенең Мәғариф комиссариаты янындағы ғилми-фәнни вә тарихи ойошманың хеҙмәте» (Стәрлетамаҡ, 1922, 2-се киҫәк), «Башкирия в русской литературе» (II т., Өфө, 1964) тигән йыйынтыҡтарға индерелә. Был шиғырҙар Салауат Юлаевтың уҡыусыларға киң билдәле әҫәрҙәренән һанала. Улар башҡорт телендә С. Мирасов (Башҡортостан шуралар йөмһүриәтенең..., Стәрлетамаҡ, 1922, 1-се киҫәк, 21—24-се биттәр; Ә. Усманов. Салауат батыр. Өфө, 1945, 27—31-се биттәр) менән Р. Ниғмәтиҙең (Салауат. Өфө, 1953, 19—29-сы биттәр; Башҡорт поэзияһы антологияһы. Өфө, 1971, 79—82-се биттәр; Салауат Юлаев. Шиғырҙар. Өфө, 1981 һ. б.) художестволы тәржемәләрендә донъя күрҙе. Шулай уҡ рус телендә лә Б. Турганов һәм И. Волобуева тәржемәләрендә бер нисә тапҡыр баҫылып сыҡты: Дружба народов, 1972, № 11, 234—237-се биттәр; Наш Салават. Уфа, 1973, 5—28-се биттәр; Поэзия народов СССР IV—XVIII веков. М., 1973, 543—547-се биттәр; Поэты Урала, I т.

Свердловск, 1976, 26—28-се биттәр; Салават Юлаев. Стихотворения. Уфа, 1981.

Бында Салауат Юлаевтың тәүге ете шиғыры Р. Г. Игнатьев баҫмаһынан Р. Ниғмәти тәржемәһе буйынса бирелә.

Һандуғас. Тирмәмдә. Тәүге аңлатманы ҡарағыҙ. Был ике шиғыр Р. Г. Игнатьев баҫмаһында бер тексты тәшкил итә. Р. Ниғмәти икегә бүлеп тәржемә иткән.

Уҡ. Яу. Егеткә. Зөләйха. Тыуған илем. Тәүге аңлатманы ҡарағыҙ.

«Ҡәҙерлеләй ғаиләм, һөйгән йәрҙәр...» Ф. Д. Нефедов баҫмаһында, Салауат Юлаевтың башҡа шиғырҙары кеүек үк, сәсмә формала түбәндәгесә бирелә:

«Дорогая семья, любимые жены и ты, святая моя родина! Неужели я должен вас покинуть? Когда думаю, что с вами расстанусь, мне станет так грустно, и слезы, невольные слезы, подступают к моим глазам. Много надо мне силы, чтобы сдержать их потоки и не проронить ни одной слезы!»

Был әҫәрҙе профессор Ғ. Б. Хөсәйенов башҡортса шиғыр ҡалыбына һалған (Башҡортостан уҡытыусыһы, 1975, № 5, 44-се бит).

«Юлһыҙ ғына ерҙән юлдар ярып...» Күренекле фольклорсы В. П. Бирюков Силәбе өлкәһе Ҡонашаҡ районы Ҡорман ауылында Бикмәтов Миҙхәт Кәрим улынан яҙып алып, 1949 йылда Силәбелә сыҡҡан «Фольклор Урала. Исторические сказы и песни» тигән йыйынтыҡта русса баҫтыра (28-се бит):

Иду, бреду по дороге,
Иду, бреду без дороги,
О тебе тоскую, ягодка моя,
О тебе пою, Джир Джилага моя.

Мне солнце полдень отметит,
Мне звезды полночь осветят, —
Днем и ночью я безустали иду.
За горой аул над берегом найду.

Меня дождешься, Амина,
Навстречу вынесешь сына.
«Здравствуй, сын мой,
Первый сына Рамазан!
Я — твой отец,
Первый сын мой Рамазан!»

Башҡортсаһы әлегә табылмаған. Йыйынтыҡта шағир Р. Бикбаев тәржемәһендә бирелә.

Б у г ә с ә у г ә ҡ у ш ы л ы п, и р-б а т ы р-ға ҡ у ш б у л ы п... Был әҫәрҙең ике варианты билдәле. Тәүгеһе — сәсмә тел менән яҙылғаны — 1922 йылда С. Мирасов тарафынан баҫтырып сығарыла (Башҡортостан шуралар йөмһүриәтенең... , 1 киҫәк, 31-се бит). Аҙаҡ ошо уҡ текст рус телендә лә донъя күрә (Песни и сказания о Разине и Пугачеве. М., 1935, 212—215-се биттәр; Пугачев в Среднем Поволжье и Заволжье. Куйбышев, 1947, 43—44-се биттәр). Икенсе вариант тәүгеһе менән бер үк йөкмәткелә ҡобайыр тибындағы шиғыр үлсәме менән ижад ителгән. Ул Ғафури районы Яктыкүл ауылында йәшәгән сәсән Вәлиулла Ҡоломбәтовтың йәш сағынан бирле йыйып, 1940 йылда СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор фондына тапшырылған ҡулъяҙма материалдары араһында һаҡлана (Хәҙер — Башҡортостан фәндәр академияһының ғилми архивы. Ф. 3, оп. 12, д. 216). Был вариант матбуғатта Р. Ниғмәти редакцияһы менән сыҡты. (Салауат, 30—35-се биттәр; Башҡорт поэзияһы антологияһы, 83—85-се биттәр; Башҡортостан ҡыҙы, 1971, № 1, 13—14-се биттәр һ. б.). Ошо киң билдәле вариант алынды.

«Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылға...» Тәүге тапҡыр Ә. Усманов төҙөгән «Салауат батыр» йыйынтығында баҫыла (29-сы бит).

«Сәстәреңдең толом сулпылары...» (Салауаттың һөйгән ҡыҙы Зөләйхаға йырлаған йыры). Ошо һәм артабанғы ике текст Башҡортостан фәндәр академияһының ғилми архивында һаҡлана (Ф. 3, оп. 12, д. 445, 195—199-сы биттәр). Уны 20-се йылдарҙа М. Буранғолов Ғәбит сәсәндән яҙып алған. Ғәбит сәсән, билдәле булыуынса, Ишмөхәмәт сәсәнде яҡшы белгән һәм уның хәтерендәге әҙәби мираҫтың байтаҡ өлөшөн беҙҙең быуынға еткергән. Ишмөхәмәт сәсән иһә үҙ сиратында Салауаттың замандашы Байыҡ Айҙар сәсән менән таныш булған.

Текст Салауат менән Зөләйханың әйтеше рәүешендә яҙып алынған. Ләкин бында ғәҙәттәге әйтештәр кеүек һәр строфа һайын ике авторҙың телмәре аралашмай, — тәүҙә тотош Салауаттың һүҙҙәре, унан һуң Зөләйханың яуабы килә. Шуға күрә, уңайлылыҡ өсөн, бер аҙ ҡыҫҡартып, Салауаттың шиғырҙарын ғына бирәбеҙ. Әҫәр ошо уҡ редакцияла «Башҡорт әҙәбиәтенең текстоло-

ғияһы мәсьәләләре» тигән китапта (Өф
1979, 120—121-се биттәр) донъя күрҙе.

«Ағиҙелкәй аға ҡая аралап...» (Салауаттың Уралға ҡарай йы ры). Шул уҡ сығанаҡтан. Бер аҙ ҡыҫҡар тылды. «Башҡорт әҙәбиәтенең текстологи һы мәсьәләләре»ндәге редакция буйынс 121—122-се биттәр.

[1] Ҡуға — ҡамыш.

«Һауаларҙа осҡан, ай, яғы бай...» (Салауаттың яуҙа яралаı ғас йырлаған йыры). Шул уҡ сығ наҡтан тулыһынса килтерелә. «Башҡор әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре йыйынтығында баҫылды, 122-се бит.

## ЙЫРҘАР

1-се куплет Р. Г. Игнатьев баҫмаһынд Салауат Юлаев әҫәрҙәре рәтендә бирелгә (Башкир Салават Юлаев, пугачевский бр гадир, певец и импровизатор. Казань, 189 131-се бит). Ҡалғандары түбәндәге сығ наҡтарҙан Салауат тураһындағы халы йырҙары араһынан алынды: Башҡортоста фәндәр академияһының ғилми архив Ф. 3, оп. 12, д. 64, 1—12-се биттәр; Сала уат, 39—46-сы биттәр; Ә. Усманов. Салауа

батыр, 32—38-се биттәр; Ҡазан утлары, 1967, № 5, 121-се бит; Башҡорт дәүләт университетенең башҡорт әҙәбиәте кафедраһы эргәһендәге фольклор фонды (шифрһыҙ).

Йырҙар ошо редакцияла «Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре» йыйынтығында баҫылды. 127—130-сы биттәр.

[1] Зөләйха урынына ҡайһы бер варианттарҙа Гөлбәзир йәки Әминә тигән исемдәр осрай.

[2] Ҡайһы бер варианттарҙа Оло Ҡатау тип тә йырлана.

Йүрүҙән заводы ғәскәрен
Ҡуй һарығы кеүек әйҙәнем, —

тип тамамланған текст та бар.

## РӘСМИ ҠАҒЫҘҘАР

### № 1

Юлай Аҙналин 1772 йылда Польша походына киткәс, Салауат Юлаев уның урынына старшиналыҡ вазифаһын башҡарған ваҡытта яҙылған. Герой-шағир ҡулъяҙмалары араһынан Крәҫтиәндәр һуғышына тиклемге берҙән-бер илдәле ҡағыҙ булыуы менән айырылып тора. Тәүге тапҡыр «Совет Баш-

ҡортостаны» газетаһында 1978 йылдың 2 ноябрендә баҫылды.

Документта иҫкә алынған Ырыҫбай Шаганаев — XVIII быуаттың ҡырҡынсы йылдарында Шайтан-Көҙәй волосының старшинаһы булып торған (тупаҫ ғәҙелһеҙлектәре өсөн һуңынан был вазифанан бушатылған) эре башҡорт феодалы Шағанай Борчаҡовтың улы. Борчаҡов 1759—1762 йылдарҙа үҙенең балалары Ҡунаҡкилде һәм Ырыҫбай Шағанаевтар менән бергә, шәхси мәнфәғәттәрҙән сығып, Шайтан-Көҙәй волосына ҡараған башҡорт ерҙәренең бер өлөшөн Сим заводын төҙөп яткан колонизаторҙарға Я. Б. Твердышев менән И. С. Мясниковҡа һатырға тырыша. Ете йыллыҡ һуғышта йөрөп ҡайткан Юлай быға ҡаршы төшә. Власть вәкилдәре завод хужалары менән милли феодалдарҙы яҡлай. Көрәш бер нисә йылға һуҙыла. Үҫә төшкәс, был эшкә, атаһын яҡлап, Салауат та ҡушыла. Улар доҫлок эҙләп Өфө провинция канцелярияһына мөрәжәғәт итә. Ләкин суд, Юлай менән Салауатты ғәйепле тип табып, 600 һум штраф һала (Материалы по истории Башкирской АССР, т. IV, ч. II. М., 1956, 166—171, 595-се биттәр).

Был рапорт аҙмы-күпме дәрәжәлә Сала-

уаттың донъяға ҡарашы формалашыуҙағы башланғыс этапты күҙ алдына баҫтыра. Бер яҡтан, пошлина түләүҙе талап иткәнгә Екатерина адресына әҙәпһеҙ һүҙ менән яуап биргән Ырыҫбай Шағанаев өҫтөнән юғары власть органдарына Салауаттың рапорт яҙыуы электән килгән ыҙғыштың дауамы булырға тейеш. Икенсе яҡтан, атаһы дөйөм Рәсәй мәнфәғәттәрен яҡлап походта йөрөгән саҡта «старшиналыҡ эшен әҙа ҡылыусы» йәш егеттең, үҙ вазифаһына тоғро ҡалып, ул ваҡытта әле батшаға ысынлап та тоғролоҡ күрһәтеүе аптырарлыҡ хәл түгел. Билдәле булыуынса, XVIII быуат Рәсәйенең түбән ҡатлам массалары идеологияһында батшаға ниндәйҙер ышаныс менән ҡарау, унан яҡлау өмөт итеү күренеше киң таралған була. Шуның шауҡымы, күрәһең, йәш Салауатты ла урап үтмәгән. Ә инде восстание осорондағы документтар уның ижтимағи ҡараштары инде тамам сынығып өлгөрөүе, азатлыҡ өсөн көрәш идеяларына герой-шағирҙың тәрән бирелгәнлеге тураһында һөйләй.

Текст архивтағы нөсхә буйынса бирелде. Түбәндә уны, төрки яҙмаһындағы үҙсәнлектәре һаҡланған килеш, хәҙерге транскрипцияла килтерәбеҙ:

## Репурт Өфө приказына

Өфө өйәҙенең Себер юлының Шайтан-Күдей иләүенең старшиналыҡ эшен әҙа ҡылғучы Салауат Юлай уғлы бәндәчелек илән репуртым үҙәрендә мәғлүм ҡыламын. Өфө приказына аңланыр мундин түбән. Ҡайсыдур Өфө өйәҙенең Ҡазан юлының старшина Мөхәмәтрәхим Йосыф уғлы командасының мишәрдән указ илән безгә писар булыҡкучы Әбүбәкер Аҡман уғлы сорады үз камандамыз Ырусбай Шағанай уғлундан миҫла старшина Юлай Азналы уғлына Бикбау Чубан уғлының биргән чүләбитнәсе хаҡында: «Син, Ырусбай, гәйебләнүбсин, имде рәхимле бадишаһҡа тейешле бушлина бир, — диб, — Өфө приказына ебәрүргә кирәкле булынадур», — диб. Шул ваҡытда мәҙкүр Ырусбай Шағанай улы әйтде писар Әбүбәкер Аҡман уғлына: «Син ...[1] нигә кәрәк», — диб. Писар әйтде: «Рәхимле бадишаһымыз гәзими хәзрәтләренең хәзинә дәфтәренә кирәк», — диб. Мәҙкүр Ырусбай йәнә әйтде, ҡулы илән сүрәт ҡылуб: «Бадишаһымызға...»[2] — дип күрсәтте. Һәм бән, старшиналыҡ эшен әҙа ҡылғучы Салауат Юлай уғлы шул сүзне ишеткән заман тотоб Өфө приказына ебәрергә диб диншик-

кә ҡушҡан ирдум. Мәсғуд Аҫкар уғлы ярдам итүб, алуб китде. Шул сәбәпле тотоб ебәрүргә булмады. Имде шул хәлне Өфө приказына мәғлүм ҡыламын. Ул олуғ император ғәзими хәзрәтләринә андайун ағыр сүзләр еткермәк сәбәпле ҡияс ҡыламын. Әллә ниндәй явуз сағышлары бардур дәйү. Шул сәбәбле бән, старшиналыҡ эшен әда ҡылғучы Салауат Юлай уғлы ҡулум ҡуйдум. 1772 йылда маһир рабиғ[3] ахырның әүәл көнөндә. Писар Әбүбәкер Аҡман уғлы ҡулум ҡуйдум.

Ошбу репурт Өфө приказына ебәрелде. Бадишаһ эше хаҡында. ... арҡылы[4].

[1] Әҙәпһеҙ һүҙ.

[2] Әҙәпһеҙ һүҙ.

[3] Мосолман календары буйынса ай исеме.

[4] Һуңғы абзац адрес формаһында — бөкләнгән ҡағыҙҙың тышҡы яғына яҙылған. Арттан икенсе һүҙ таныҙлыҡ түгел. Бында йә вазифа, йә кеше исеме булырға тейеш.

## № 2

Ошо һәм 3 — 11-се текстар «Документы ставки Е. И. Пугачева, повстанческих властей и учреждений» (М., 1975) тигән документтар йыйынтығынан алынды. Унда Са-

лауат Юлаевтың поход канцелярияһы айырым төркөмгә бүлеп бирелгән (357—375-се документтар). 2-се һәм 4—11-се документтар «Пугачевщина» йыйынтығында (1 т., М., 1926, №№ 152, 154, 155, 177, 248, 72, 73, 128, 125), 2—4, 6—9, 11—15-се документтар «Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии. Сборник документов» китабында (Өфө, 1975, №№ 44—46, 49—52, 55, 66, 109, 148, 202) баҫылған.

[1] Салауат Юлаев менән Әбдрәшин Чекеевтең ҡултамғалары ғәрәп хәрефтәре менән бирелгән.

## № 3

2-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

[1] Атаман И. Н. Зарубин-Чика күҙ уңында тотола.

[2] Салауат Юлаевтың ҡултамғаһы — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 4

2-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

[1] Салауат Юлаевтың ҡултамғаһы — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 5

2-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

[1] 1774 йылдың 14 ғинуарында сотник Д. Ершов, ҡартлыҡ сәбәпле хәрби хеҙмәттән ебәреүҙәрен һорап, полковник Салауат Юлаевҡа ғариза бирә. Салауаттың резолюцияһы шул ғариза ҡағыҙының аҫтына яҙылған.

[2] Салауат Юлаев менән Адил Бигашевтарҙың ҡулъяҙмалары — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 6

2-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

[1] И. Н. Зарубин-Чика.

[2] Пугачевсыларҙың Өфөнө баҫып алыуы дөрөҫ түгел.

[3] Старый Посад.

[4] Салауат Юлаев, Ҡәнзәфәр Усаев, Илсеғол Итҡолов, Сөләймән Күсәкәев, Адил Бигашевтарҙың ҡултамғалары — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 7

2-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

[1] Салауат Юлаев менән Ҡәнзәфәр Усаевтың ҡултамғалары — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 8

8—11-се документтарҙа Салауат Юлаевтың ҡултамғаһы икенсе булып тора. Тәүге ҡултамғалар И. С. Кузнецов (№№ 8—9, 11) йәки уның исеменән М. Е. Мальцев (№ 10) тарафынан һалынған. Текстарҙа һүҙ улар исеменән алып барыла. Тимәк, Салауат был яҙмаларҙың төп авторы түгел, ә унда әйтелгәндәрҙе уртаҡлашыусы булараҡ сығыш яһай һәм шул мәсьәләләргә үҙенең уй-ҡараштарын белдерә. Шуны иҫәпкә алып, уны ошо документтарҙы ижад итеүсе авторҙарҙың береһе, тип кенә ҡарау дөрөҫөрәк булыр.

[1] Руссаһында: учреждениеларына.

[2] Салауат Юлаевтың ҡултамғаһы — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 9

8-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

[1] Салауат Юлаевтың ҡултамғаһы — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 10

2,8-се документтарҙың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

[1] Салауат Юлаевтың ҡултамғаһы — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 11

2,8-се документтарҙың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

[1] Секунд-майор Д. О. Гагрин етәкселегендәге язалау командаһы яҡынлашыу хаҡында ебәрелгән рапортты алыу күҙ уңында тотола.

[2] Салауат Юлаевтың ҡултамғаһы — ғәрәп хәрефтәре менән.

## № 12

12—14-се документтарҙы тарихсы Ә. Н. Усманов 1962 йылда «Ағиҙел» журналының 8-се һанында баҫтыра (86—93-сө биттәр). Беҙ уларҙы төрки теленән башҡортсаға тәржемә итеп бирҙек. Шул уҡ журналда баҫылған фотокопиялары буйынса был документтарҙың боронғо яҙылыш хәлендәге транскрипцияһын да бирергә була:

Полковник Салауат Юлаевтың сотник

Иләтбай Илембай улына отрядҡа кешеләр йыйыу тураһындағы приказы.

«Ул олуғ император бадишаһымыз Петр Федорович хәзрәтләренең указы ҡеүәтенчә тәхҡиҡ[1] бән полковник Салауат старшина Юлай уғлыдан ... ...[2] сотник Иләтбай Илембай уғлыға, рәхимле бадишаһымыз хәзрәтләренә ҡаршылыҡ ҡылғучы ворларға ҡаршы тороп, үз ҡул астындағы командалары илән, жән-тән илән суғуш итәргә дәйү, һәр өйдән хезмәткә ярардайларын — атларын вә йәйәүлеләрен ҡалдырмаинча, инҡарларына ҡуймаинча бадишаһ хезмәтенә чығарурға диб. Әгәр ҙә хезмәткә инҡар итәсе булсалар, андай кемсәнәләрне тотоб, репуртың илән безләргә ебәрүргә дәйү вә һәм без, түбәндә язылғучы команда халайыгклары сотник Иләтбай Илембай уғлы чын тыңламаҡда улуб хезмәт иткәйсездер, падишаһымыз ағзам хәзрәтләренең вә хөкөмөндән ҡурҡмаҡ өчөн диү, полковник Салауат старшина Юлай уғлы ҡулум ҡуйдум вә һәм инанмаҡлыҡ хаҡында печат басдум.

1774 йылда мартның 24 көнөндә».

[1] Т ә х ҡ и ҡ — ысын.

[2] Ике һүҙ аңлашылмай. Ә. Усманов уларҙы ҡ а й һ ы  у л тип уҡыған. Ләкин был дөрөҫ түгел.

## № 13

12-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ. Ә. Усманов раҫлауынса, был ҡағыҙ Салауаттың үҙ ҡулы менән яҙылған.

Транскрипцияһы:

«Сезки рәхимле күңел берлән хезмәт иткүче старшина Буләк Яҡуп уғлындан йәнә атаман Ладин фәлән уғлундан [1] йәнә старшина Арслан Рангол улундан ебәрүлгән репуртны бән, главнуй полковник Салауат Юлай уғлы, юлуҡдум Ғәпделкәрим Ғәйет уғлы арҡылы

Имде мундин түбән мундағы хәлләрне баян итәм.

Рәхимле бадишаһымыз Петр Федорович хәзрәтләре безнең Әй буйына килде, туғуз мең кеше илән. Һәм мәзкүр гусарлар полкына юлуғуп [2], ике мәртәбә суғуш итдүк, бик (күп) [3] кешеләрен үлтүрүп, бер аҙ кешеләре ҡачуб ҡотолдо.

Имде анда ебәрүлмеш командирларның әмерен тыңлаб, ғайәт тә мәхкүмлек [4] илә команда йыйып, килгән дошманлар илә ҡаршы торор жәһәтен ҡылғайсыз, күңелегезне һич бер яҡҡа ауыштырмаинча дәйү әмер иткүче главный полковник Салауат Юлай уғлы.

1774 йылда саратаның[5] 4 көнөндә. Мундин анда барырға булманы — Көнгәрға китдүк, һәм сезләр бер анча командалар илә килүб, безгәргә юлуҡкайсызлар. Ошбу языу берлән барғучы Ғәпделкәрим Ғәйет уғлына ылауны биргәйсез, юлдашы берлән, туҡтаусыз һәм прагунсыз»[6].

[1] Ладин фәлән углы — Ә. Н. Усманов шулай уҡыған. Баш күтәреүселәр отряды атаманы Аладин Фәлҗков күҙ уңында тотола.

[2] Батша армияһы подполковнигы И. И. Михельсон ғәскәрҙәре тураһында һүҙ бара.

[3] Ә. Н. Усманов өҫтәгән һүҙ.

[4] Мәхкүмлек — сослоҡ, тиҙлек.

[5] Мосолман календары буйынса ай исеме.

[6] Прогонһыҙ — аҡса түләүһеҙ.

## № 14

12-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ. Транскрипцияһы:

«Без, главнуй атаман Юлай Азналы уғлындан һәм бригадирлыҡ эшен әда ҡылғучы главнуй полковник Салауат Юлай уғлындан, сүз шулдур:

Сез, Катау заводында командир булуп торғучы прикащикларға һәм ҡартларға!

Әгәр сезнең кешеңез безгә тотолса, без аларны үлтүрмәиичә һәм зарар килтермәйенчә сезгә ҡайтарамыз. Әгәр безнең кешемез сезгә тотолса, итәсез аларны тоткон һәм бәгзеләрен үлтерәсез, ирмеш. Без, әгәр безләрнең күңелемездә усаллыҡ буласы булса, алла теләсә, сезләрдин артуғыраҡ тотоп һәм сезләрдин артуғыраҡ үлтүрүр ирдүк. Без теләмәймез, күңелемездә усаллыҡ юҡлуғындан. Имде күңелемездә усаллыҡ юҡ. Әгәр татыулыҡны теләй торған булсаңыз, ебәргәйсез Мусабай Бикжан уғлын, аралуҡда йөрөп, татыулаштырыу өчөн. Сезнең безгә тотолмыш ике урусның бересүн ҡайтардуҡ, языу илә, һәм Мусабай ҡайтуб килгәндән кизин[1], мунда безнең ҡулумызда ҡалғучы берәгүсен дә йәнә ҡайтарурмыз.

Безләр бер вә беремез илә ысбурлашуб, бер вә беремезне бөлдөрөшөб торорға мөмкин дүгүлдүр: көлләмөз дә падишаһымыз третий император Петр Федорович хәзрәтләренең ҡоломоздор һәм безләргә даим изгү хәбәрләр киләдүр, указлар арҡылы: уғлы Павел Петровичкә ҡушкандыр дәйү, сезләр дә аларның сәләмәтлегүн теләгәйсез, диү. Изгүлек теләгүчи дустуңыз главнуй атаман Юлай Азналы уғлы ҡулум ҡуйдум

һәм бригадирлыҡ эшен әда ҡылғучы главный полковник Салауат Юлай уғлы ҡулум ҡуйдум.

1774 маһ рәжәпнең 15 көнөндә

Войсковой писар Ғәбдрәшит уғлы ҡулум ҡуйдум».

[1] Аҙаҡ, һуң.

[2] Мосолман календары буйынса ай исеме.

**№ 15**

12-се документтың аңлатмаһын ҡарағыҙ. Салауаттың төрмәнән яҙылған хатының төп нөсхәһе табылмаған. «Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии» тигән китаптағы русса текст башҡортсаға әйләндереп алынды. Бында «Ағиҙел» журналының 1962 йылғы 8-се һанында Ә. Н. Усманов баҫтырған тәржемә лә файҙаланылды.

## ҠУШЫМТА

**Силәбе өлкәһе Һатҡы районы Сулея ауылында Хәйрулла Ибраһимовта (1902 йылда тыуған) һаҡланған яҙмалар**

**№ 1**

**Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Пугачев ғәскәренә ҡушылыуы хаҡында белдергән хаты**

1973 йылдың декабрь баштары

Иң олуғ булған батша хәзрәтләре Петр Федорович вәкиле безләргә мөрәжәғәт итте. Безләр барымыз да ҡаршы алдыҡ. Батша хәзрәтләре безләргә ял итергә ҡушты. Батша хәзрәтләре бездән...[1] ҡайҙа икәнен бик ентекләп бирергә тырышты.

Тиз көндә Бәләбәй[2] крепосына юл тотамыз. Мин бергә уҡыған шәриктәшләр илә осрашып таныштым. Батша хәзрәтләре ғәскәрне килтереп тулысынча тапшырған өчөн рәхмәтләр әйтте. Бу хатны Ғәйет Ғәбделкәрим артынан ебәрәмез.

Салауат Юлаев[3]
Туҡай ауылы

*Күсермә.*
*1973 йылдың 28 сентябрендә «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫылған.*

[1] *Х. Ибраһимов күсергән текста артабанғы бер нисә һүҙ юйылған.*
[2] *Төбәк исемдәре яңылыш күсерелеүе ихтимал.*
[3] *Күсереүсе Салауаттың ҡултамғаһы урынына уның исемен яҙған булырға тейеш.*

## № 2

### Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Һатҡы заводы эргәһендәге хәлдәрҙе еткергән хаты

1774 йылдың июне [1]

Иң олуғ батшамыз хәзрәтләре Петр Федоровичның әмере илән өч мең ғәскәр илән Сатка заводына ике яҡлап юл тоторға. Ҡаршы торған дошман ғәскәрен тар-мар итергә һәм алырға. Мында дошман ғәскәре бик нығ ҡарщылыҡ илән торҙо. Күп юғалтыуға осрадыҡ. Өч көн буйына ҡаршылыҡ булды. Завод бинасына индек. Хибестә булған халыҡлар азат ителде. Безләргә биш йөзләп халыҡ илә Фролов командаға инде. Суғыш ҡоралы мында күп булды, безләргә ҡалды.

Полковник Салауат Юлаев [2] ҡулым ҡуйдым. 20-нче саратан [1] 1774-нче йыл.

*Күсермә.*
*1973 йылдың 28 сентябрендә «Совет Башҡортостаны» гәзетаһында баҫылған.*

[1] *Күсермәлә датаның дөрөҫ күрһәтелмәүе ихтимал.*
[2] *1-се тексттың иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.*

## № 3

### Салауат Юлаевтың сотник Ҡадир Ғәбделкәрим улына һөжүмгә әҙерләнеү тураһындағы әмере

1774 йылдың 1 июне[1]

Иң олуғ батша хәзрәтләре Петр Федоровичның әмере илән полковник Салауат Юлай уғлы.

Батша агзам хәзрәтләренең бойороғон үтәүдә Ҡыйғы юлы илән дошман ғәскәренә ҡаршы әмер ҡылам. Сотник Ҡадир Ғәбделкәрим уғлы, Илембай уғлына бар булған суғышҡа яраҡлы халыҡты һәм атларны (йыйығыҙ), батшамыз агзам хәзрәтләре алдына өч мең гәскәр әзер булсын. Андағы залим алпауытлардан суғышҡа яраҡлы булғанын барын да инҡарсыз алырға һәм дә Юлай Азналинға безләргә ярдамға килеүдә тиз арада хәбәр ебәрергә. Юл айҡанында безләр күп юғалтыуларға очрадыҡ. Дошман гәйәт тә ныҡ ҡаршылыҡ ҡылды.

Полковник Салауат Юлаев[2] ҡулым ҡуйдым. Июнь айының 1-нче көнө, 1774-нче йыл.

*Күсермә.*
*1973 йылдың 28 сентябрендә «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫылған.*

[1] *2-се тексттың иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.*
[2] *1-се тексттың иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.*

## № 4

## Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Әй буйындағы алыштар тураһында яҙған хаты

1774 йылдың 4 июне

Сезки бөйөк батшамыз хәзрәтләре Петр Федорович бойороғо буйынса, дошман ҡаршы тороу илә, батшамыз ҡушыуын тыңлап, ихтирам ҡылдыҡ, дошман ҡаршы тороп, юғалтыуға осрадыҡ. Атаман Аласетдин Әфләм улы ике мең халыҡ илә безләргә юлыҡты. Батшамыз хәзрәтләре рәхмәт белгертте. Ике таңҡыр сугышҡа әйләдек. Юлны дауам ҡыламыз. Әй суы буйына алпауыт Мәсғүтйән күп ғәскәр илә ҡаршылыҡ ҡылды. Алпауыт Мәсғүтйән халҡын ташлап йәшеренде. Старшина Бәхтиәр Ҡанҡай улы

безләргә өс мең халыҡны батшамыз хәзрәтләре алдына килтереп тапшырды. Юлны дауам ҡыламыз, Дыуан юлына табан. Сотник Иләтбай уғлы юлдашлары илә сезләргә ихтирам ҡыласызлар.

Полковник[1] Салауат Юлаев[2]
4 июнь, 1774 йыл

*Күсермә.*
*1968 йылдың 2 августында «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫылған.*

[1] *1774 йылдың 3 июнендә Пугачев тарафынан Салауатҡа бригадирлыҡ дәрәжәһе бирелә.*
[2] *1-се тексттың иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.*

## № 5

### Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Дыуан янындағы һуғыштар һәм ғәскәр йыйырға кәрәклеге хаҡында белдергән хаты

1774 йылдың 5 июне

Елдәк юлында бөйөк батшамыз хәзрәтләре Петр Федорович бойороғо буйынса, халыҡ өсөн манифест иғлан ителде. Батшамыз илә сигеҙ мең халыҡ бар ине. Бында Дыуан алпауытларынан бик күп күмелгән ҡораллар алынды. Дошман бик ҡаршылыҡ

илә суғыш ҡылды. Хибес биналарынан бик күп халыҡлар азат ҡылынды. Сотник Морҙағол Аҡбай улы — Аҙнағол ауылы — биш мең халыҡны батшамыз хәзрәтләре алдына тапшырған өсөн батша хәзрәтләре Морҙағол Аҡбай улына полковник бойороғон раҫланы. Батшамыз хәзрәтләре бойороғо буйынса, Шайтан Көҙөй волосы старшина Юлай Аҙналинға: ебәргән бойороҡларны кисектермәйсә, халыҡларны, яңы командалар төҙөп, батшамыз алдына килтереп тапшырғайсыҙдар. Тиз көндә көтәмез. Һәр бер утарны ҡалдырмайса, халыҡны ете-сигез меңләп, үз ҡоралары илә, сотниклар аша. Бындағы хәлне барыусы Ғәбделкәрим Ғәйет улы аңлатыр, юлдашлары илә ылауны прогонсыз туҡтатмайбыз.

Полковник Салауат Юлаев [1]
5 июнь, 1774 йыл

*Күсермә.*
*1968 йылдың 2 авгусында «Совет Башҡортостаны» гәзитәһында баҫылған.*

[1] *1-се һәм 4-се текстарҙың иҫкәрмәләрен ҡарағыҙ.*

## № 6

**Салауат Юлаевтың Бәхтиәр Ҡанҡаевҡа**

**һәм башҡа хәрби етәкселәргә яңы һөжүмгә ғәскәр йыйнау тураһындағы әмере**

1774 йылдың 2 июле

Сезки бөйөк батшамыз Петр Федоровичның айырым бойороғо белән Салауат Юлаев [1].

Сезләргә, старшина Бәхтиәр Ҡанҡай уғлына, атаман Аласетдин Әфлән уғлына, сотник Ранғол уғлына, сотник Яныбай уғлына, — сезләргә ҡушамыз:

беренсе, Бәхтиәр Ҡанҡай уғлына — биш мең халыҡ, атлары, ҡоралары илә;

атаман Аласетдин Әфлән уғлына — сигез мең халыҡ, атлары, ҡоралары илә;

сотник Ранғол уғлына — ун мең халыҡ, атлары, ҡоралары илә;

сотник Яныбай уғлына — биш мең халыҡ, атлары, ҡоралары илә, батшамыз бойороғон алып, яңы командалар төзөп, халыҡлар илә үзегез килеп рапорт биргәйсезләр.

Батшамыз хәзрәтләре әмере буйынса өс тапҡыр суғыш ҡылдыҡ. Күп халыҡлар үлгерелде. Дошман ҡаршы булды. Батша хәзрәтләре әмерен инҡар итеүселәрне үзегез менән алып килгәйсезләр. Ошбу хатны Ғәбделкәрим Ғәйет уғлы аша ебәрәмез. Мын-

дағы хәлне ул аңлатыр. Ылауны юлдашлары илә туктатмыйбыз.

Полковник Салауат Юлаев [2]
2 июль 1774 йыл

*Күсермә.*
*1968 йылдың 2 авгусында «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫылған.*

[1] *Күсермәлә шулай. Төп нөсхәлә Салауат Юлай улы булырға тейеш.*
[2] *1-се тексттың иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.*

## № 7

### Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Елдәк крепосын алыу тураһында яҙған хаты

1774 йылдың 22 июле [1]

Сезки бөйөк батшамыз Петр Федорович бар булған халык илә Елдәк крепосына килеп, өс көн иләде (әйләдек) [2]. Күп халык үлтерелде. Дошман бик нык ҡаршылык кылды. Бөйөк батшамыз бойороғон тыңлап, соңғы көн суғыштан суң крепость бинасына кереп яуладык. Дошман бар ҡоралларны ташлап китергә булды. Хибес бинасынан тоткон булған халык азат ителде. Күп вакыттан бирле яткан Ҡәнзәфәр

Арслан уғлы Усаев, Чилин, Федоров вә башҡалар [3]. Күп ҡораллар безләргә ҡалды. Дошман бик күп ҡоралны вә бүтән ҡиммәтләрне Елдәк суына ташлап өлгөрдө. Батша хәзрәтләре бойороғо буйынса, туҡтатмайынса булған ҡиммәтләрне үә башҡаларны Ғәбделкәрим Ғәйет уғлы аша юлдашлары илә ебәрермез. Бойороуға бинайән йыйылған халыҡларны соңламыйса күрсәтелгән урынға батшамыз алдына килтергәйсезләр. Елдәктә йыйылған халыҡҡа манифис иғлан илә күп санда халыҡлап сафҡа инделәр. Мындағы хәлне белеү өсөн Ғәбделкәрим уғлы бара.

Полковник Юлай Азналин уғлына батшамыз [4] бойороғо бинаән сезгә полковник Салауат Юлаев [5].

Июлнең 22-се көнөндә,
1774 йыл

*Күсермә.*
*1968 йылдың 2 авгусында «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫылған.*

[1] *Дата дөрөҫ түгел. Салауат Елдәк крепосы тирәһендә 1774 йылдың сентябрендә һуғыша.*
[2] *Документты газетала баҫтырыуға әҙерләгән Д. Мәһәҙиев иҫкәрмәһе.*
[3] *Был һөйләмдәге хатаны төп нөсхәне күсереүселәр ебәреүе ихтимал. Ҡәнзәфәр Усаев 1774 йылдың август башында ҡулға алына, уны ҡабат ҡотҡарыу факты билдәле түгел.*

[4] *Емельян Пугачев менән Салауат 1774 йылдың июнь аҙағында айырылыша, Елдәк крепосы янындағы һуғыштар барғанда, «батша» инде ҡулға алынған була.*

[5] *1-се текстың иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.*

## № 8

### Салауат Юлаевтың Бәхтиәр Ҡанҡаевҡа һәм башҡаларға яңы командалар менән килеү тураһындағы бойороғо

1774 йылдың 25 июле[1]

Бөйөк батшамыз Петр Федоровичтың бойороғо буйынса полковник Салауат Юлаев сезләргә — тиз көндә халыҡ илә килеп етеү өсөн старшина Бәхтиәр Ҡанҡай улына, атаман Аласетдин улына, полковник Морҙағол Аҡбай улына һәм сотникларға. Сезгә бөйөк батшамыз алдына килеп яңы командалар илә рапорт биркәйсезләр. Красноуфимск крепосына ике тапҡыр суғыш ҡылдыҡ. Дошман ғайәт тә ҡаршылыҡ ҡуйып, халыҡлар үлтерелделәр. Безләр хәзерге көндә сезләрне көтәмезләр.

Күп халыҡлар хибес бинасынан азат ҡылынды. Бөйөк батшамыз хәзрәтләрен көтәмез. Дошман күп ҡоралларын безләргә тап-

шырды. Халыҡ алдында манифис иғлан ҡылынды.

Полковник Салауат Юлаев [2]
Июль, 25-се көнө, 1774 йыл

*Күсермә.*
*1968 йылдың 2 авгусында «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫылған.*

[1] *2-се тексты ң иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.*
[2] *1-се тексты ң иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.*

## ҠУШЫМТАҒА ДӨЙӨМ АҢЛАТМА

Был һигеҙ текст, бүтән документтарҙан айырмалы рәүештә, архив кәштәләренә юлыҡмаған, 60-сы йылдар аҙағында журналист Д. Д. Мәһәҙиев тарафынан Силәбе өлкәһе Һатҡы районы Сулея ауылында йәшәгән Хәйрулла Ибраһимовтан (1902 йылғы) алынған. 1975 йылдың декабрендә миңә лә Хәйрулла ағайҙың өйөндә булып, ошо яҙмаларҙы ғәрәп графикаһында күсереп алырға тура килде. Крәҫтиәндәр һуғышына ҡағылышлы ҡағыҙҙарҙың үҙенә килеп эләгеү тарихын ул түбәндәгесә аңлатты.

1926 йылда Х. Ибраһимов хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡатау-Ивановск ҡалаһында

78 йәшлек Ҡалҡаман Хужин тигән ҡартҡа фатирға төшә. Зиһенле, хәтерле фатир хужаһы үткәндәрҙәге күп кенә хәл-ваҡиғаларҙы хәтерендә тотҡан. Бер көндө, ҡунаҡ менән кисен һөйләшеп ултырған ваҡытта, һүҙ нығыраҡ ҡуйырып киткәс, Ҡалҡаман ҡарт умарталыҡтан өйгә бер бәйләм ҡағыҙ индереп һала. Таратып ҡарай башлаһалар — һарғайып бөткән иҫке яҙмалар. Ҡарт үҙе уларҙы сатнатып уҡый, ни өсөн умарталыҡҡа эләгеүенең сәбәбен һөйләп бирә.

Уның әйтеүенсә, Салауат менән Юлай, восстание еңелеүгә табан киткәс, үҙҙәрендә бер ҡағыҙ ҙа ҡалдырмай, Юлайҙың Ҡатауҙағы Бикбулат исемле ҡайнағаһына алып барып бирәләр. Бикбулат, тентеүҙәрҙән ҡурҡып, был әйберҙәрҙе тумәр умартаһына, бал ҡорттары араһына тығып ҡуя. Ысынлап та тентеү үтә, ә был ҡағыҙҙарҙы таба алмайҙар. Ошо умарталыҡта һаҡланып, быуындан быуынға тапшырыла килгән: Бикбулаттың улы Аҙнағол, уның улы — Хужа, Хужаның улы — йәнә бер Аҙнағол, Аҙнағол улы — Ҡалҡаман. Барыһы ла уҡый-яҙа белгәндәр. Ҡалҡаман Хужиндың фатирға төшкән егеткә күрһәткән яҙыуҙары араһында фармандар, хаттар, шиғырҙар булған. Х. Ибраһимов 12 тексты күсереп ала. Ошо ваҡи-

ғанан һуң ул Ҡ. Хужинды бүтән осратмай; уның ҡарауы, Салауат шәхесе менән ҡыҙыҡһынып, ауылдан ауылға йөрөп, һорашырға тотона...

Х. Ибраһимов күсереп алған текстарҙың бишәүһе — Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға яҙған хаты, берәүһе — сотник Ҡадир Ғәбделкәрим улына, икәүһе — Бәхтиәр Ҡанҡай улына биргән әмере, икәүһе — Кинйә Арыҫланов менән Бәхтиәр Ҡанҡай улының бойороҡтары. Ә бер текст — Салауаттың 1774 йылдың 23 мартында сотник Иләтбай Илембай улына биргән бойороғо — архив сығанаҡтары аша быға саҡлы билдәле булған текст менән һүҙмә-һүҙ тап килә.

Журналист Д. Мәһәҙиев уларҙың бөтәһен дә 1968 йылдың 2 авгусында һәм 1973 йылдың 28 сентябрендә «Совет Башҡортостаны» газетаһында баҫтырҙы.

Ҡушымтала Салауат Юлаев авторлығына ҡараған текстар ғына (1774 йылдың 23 мартында яҙылғанынан башҡа) бирелә. Быуындар вәкилдәре тарафынан ҡат-ҡат күсерелә торғас, даталарҙа, исемдәрҙә, хәрби дәрәжәләрҙә һ. б. өлкәләрҙә фактик хаталар ебәрелеүе ихтимал. Текстарҙы ғәрәп графикаһынан әйләндергәндә, Х. Ибраһимов күсермәһенең яҙылышы һаҡланды. Төрки яҙ-

маһы менән хәҙерге башҡорт һүҙҙәренең тығыҙ бутальшы — күсереүселәр ғәйебе булырға тейеш.

Был яҙмаларҙың ҡушымта рәүешендә йыйынтыҡҡа индерелеүенең төп сәбәбе — уларға ғалимдарҙың иғтибарын йәлеп итеү; ошо сығанаҡты ла иҫәпкә алып, артабанғы тикшереүҙәргә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Милли батыр, шағир, публицист *(М. Иҙелбаев)* . . . . . . . . . . . . . 5

### Михнәт менән көн күргәнсе, яуҙа үләйек дан менән

Уралым . . . . . . . . . . . 37
Һандуғас . . . . . . . . . . . 39
Тирмәмдә . . . . . . . . . . . 40
Уҡ . . . . . . . . . . . . . 41
Яу . . . . . . . . . . . . . 42
Егеткә . . . . . . . . . . . . 44
Зөләйха . . . . . . . . . . . 45
Тыуған илем . . . . . . . . . . 46
«Ҡәҙерлеләй ғанләм, һөйгән йәрҙәр...» 49
«Юлһыҙ ғына ерҙән, юлдар ярып...» 50
Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып... . . . . . . . . . . . 51
«Йүрүҙән, һин беҙҙең тыуған йылға...» 59
«Сәстәреңдең толом сулпылары...» . . 61
«Ағиҙелкәй аға ҡая аралап...» . . . 63
«Һауаларҙа осҡан, ай, яғылбай...» . . 65

### Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ, батыр ирҙәр тыуыр тағы ла Ҡул ҡуйҙым: Полковник Салауат Юлай улы

Салауат Юлаевтың Шайтан-Көҙөй волосынан Өфө провинция канцелярия-

һына Ырыҫбай Шағанай улы тура-
һында ебәргән рапорты . . . . . 71
Полковник Салауат Юлаевтың М. И.
Поповты (Ивановты) Красноуфимск
казак ғәскәрҙәренең атаманы һәм
М. Д. Чигвинцевты есаул итеп бил-
дәләү тураһындағы указы . . . . 74
Салауат Юлаевтың баш күтәреүсе
Красноуфимск казактары атаманы
М. И. Попов (Иванов) менән есаул
М. Д. Чигвинцевҡа Красноуфимск
крепосы менән идара итеү тураһында
биргән күрһәтмәһе . . . . . . 77
Полковник Салауат Юлаевтың атаман
М. И. Попов (Иванов) менән есаул
М. Д. Чигвинцевҡа есаул Г. А. Ов-
чинниковты хеҙмәттән ебәреү тура-
һындағы указы . . . . . . . . 80
Салауат Юлаевтың сотник Денис Ер-
шовты хәрби хеҙмәттән ебәреү тура-
һындағы резолюцияһы . . . . . 82
Полковниктар Салауат Юлаев, Ҡәнзә-
фәр Усаев, атаман М. И. Попов (Ива-
нов) һәм башҡаларҙың Көнгөрҙө Е. И.
Пугачев ғәскәрҙәренә үҙ ихтыярҙары
менән бирергә кәрәклеге тураһында
ҡала халҡына өгөтнамәһе . . . . 83
Полковниктар Салауат Юлаев менән
Ҡәнзәфәр Усаевтың пушкалар һәм һу-
ғыш кәрәк-яраҡтары алыуҙары тура-
һында Югов заводы контораһына бир-
гән билеты . . . . . . . . . . 88
Атаман И. С. Кузнецовтың, полковник
Салауат Юлаевтың һәм атаман М. Е.
Мальцевтың ҡамалған Көнгөр хаким-

дарына, руханиҙарына һәм халҡына өгөтнамәһе . . . . . . . . . 89
Атаман И. С. Кузнецов менән полковник Салауат Юлаевтың Югов заводы атаманы Г. Т. Ситниковҡа отрядты яҡын-тирәләге ауылдарҙың кешеләре менән тулыландырыу һәм Көнгөрҙө ҡамарға әҙерләнеү тураһындағы күрһәтмәһе . . . . . . . . . . 97
Атаман И. С. Кузнецов менән полковник Салауат Юлаевтың Красноуфимск тоҙ прилавкаһы һатыусыһы С. Антоновҡа Көнгөр янына тоҙ ебәреү тураһындағы бойороғо . . . . . . 101
Атаман И. С. Кузнецов менән полковник Салауат Юлаевтың Көнгөр ҡалаһына секунд-майор Д. О. Гагрин етәкселегендәге яҙалаусы команда килеү сәбәпле һаҡлыҡ саралары тураһында Оса земство йортона биргән ордеры 102
Полковник Салауат Юлаевтың сотник Иләтбай Илембай улына отрядҡа кешеләр йыйыу тураһындағы приказы 104
Салауат Юлаевтың старшина Бүләк Яҡупов һәм башҡаларҙан рапорт алыуы һәм уларға артабан нисек хәрәкәт итергә кәрәклеге тураһында биргән әмере . . . . . . . . . . 105
Салауат менән Юлайҙың Ҡатау заводы эшселәренә мөрәжәғәте . . . . 107
Салауат Юлаевтың Шайтан-Көҙөй волосына иректәге туғандарына хакимдар алдында ғаиләә мәнфәғәттәрен ҡайғыртыу тураһында һорап яҙған хаты . . . . . . . . . . 108

## Аңлатмалар

Шиғырҙар . . . . . . . . . . . 112
Йырҙар . . . . . . . . . . . 118
Рәсми ҡағыҙҙар . . . . . . . . 119

## Ҡушымта

Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Пугачев ғәскәренә ҡушылыуы хаҡында белдергән хаты . . . . . . . 133
Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Һатҡы заводы эргәһендәге хәлдәрҙе еткергән хаты . . . . . . . . . . 134
Салауат Юлаевтың сотник Ҡадир Ғәбделкәрим улына һөжүмгә әҙерләнеү тураһындағы әмере . . . . . . . 135
Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Әй буйындағы алыштар тураһында яҙған хаты . . . . . . . . . . . 136
Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Дыуан янындағы һуғыштар һәм ғәскәр йыйырға кәрәклеге хаҡында белдергән хаты . . . . . . . . . 137
Салауат Юлаевтың Бәхтиәр Ҡанҡаевҡа һәм башҡа хәрби етәкселәргә яңы һөжүмгә ғәскәр йыйнау тураһындағы әмере . . . . . . . . . . . . 138
Салауат Юлаевтың Юлай Аҙналинға Елдәк крепосын алыу тураһында яҙған хаты . . . . . . . . . . 140
Салауат Юлаевтың Бәхтиәр Ҡанҡаевҡа һәм башҡаларға яңы командалар менән килеү тураһындағы бойороғо 142
Ҡушымтаға дөйөм аңлатма . . . 143

Литературно-художественное издание

**ЮЛАЕВ САЛАВАТ ЮЛАЕВИЧ**

**Стихи, песни и рапорты батыра**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Мәһиҙә Игебаева*
Рәссамы *Фазлетдин Ислахов*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Гөлсирә Янғужина*
Корректоры *Әлфиә Кәримова*

ИБ № 5186

Йыйырға бирелде 26.10.93. Баҫырға ҡул ҡуйылды 22.03.94. Ҡағыҙ форматы $70 \times 108^1/_{84}$. Тип. ҡағыҙы № 2. Балтика гарнитураһы. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 3,325+0,0875 форз. Шартлы буяу отт. 3,55. Иҫәп-нәшер баҫма таб. 3,57+0,16 форз. Тиражы 13000 дана. Заказ № 657. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

**БАШҠОРТОСТАН «КИТАП» НӘШРИӘ 1994 ЙЫЛДА САЛАУАТ ЮЛАЕВ ХАҠЫНДА ТҮБӘНДӘГЕ КИТАПТАРҘЫ БАҪТЫРЫП СЫҒАРАСАҠ:**

**Мирас Иҙелбаев.** Юлай улы Салауат. (Тарихи-документаль китап.)

«Арҙаҡлы шәхестәр тормошо» китаптар сериянынан сираттағы баҫма данлы Салауатҡа арнала һәм милли батырыбыҙҙың тыуыуына 240 йыл тулыу уңайы менән сығарыла.

**Ғәзиз Галин.** Последний путь Салавата (рус телендә).

Балтик буйына мәңгелек каторгаға ебәрелгән Салауат Юлаев, Юлай Аҙналин, Ҡәнзәфәр Усаев, Иван Почиталин, Евстафий Долгополов, Емельян Тюленевтарҙың яҙмыштары тураһында ике йөҙ йылға яҡын бер нәмә лә билдәле түгел ине. Крайҙы өйрәнеүсе Ғ. Галин архив материалдарына нигеҙләнеп ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр алып бара



